*Тәбиғәт ҡосағына сығығыҙ. Урман-яландар буйлап йөрөгәндә күңелегеҙҙә ҡайнаған асыу, үпкәләү, нәфрәт кеүек юҡ-бар ярһыуҙар тынып тора икәнен тойоп, йәнегеҙгә тыныслыҡ бирегеҙ. Тирә-яҡтағы йәшеллеккә, сәскәләргә һоҡланып бағығыҙ, ағас япраҡтары шауына, ҡоштар һайрауына, бөжәктәр безелдәүенә ҡолаҡ һалығыҙ. Аяҡ кейемегеҙҙе сисеп, үләнгә баҫығыҙ. Шунан иһә ошо хозурлыҡ, илаһилыҡ өсөн күңелегеҙҙе тәбиғәткә рәхмәт тойғоһо менән тултырығыҙ. Иң ҙур кинәнес - тәбиғәт менән аралашыуҙан икәнен иҫтән сығармағыҙ.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9 - 15 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№32 (606)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Башҡаларға түҙер өсөн...**

тәүҙә үҙеңдә яратырға кәрәк



3

**Пенсия "конвертта" бирелмәй**



5

**Ҡарт олатайыбыҙ...**

Бәпәнәй полкында һуғышҡан



7

**Ислам баҡсаһына инеп...**



8-9 һәр кем үҙ емешен тапһын

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бай тарихыбыҙҙы туплап һаҡлаусы архивтар бөгөн ни менән мәшғүл, уларҙың ишектәре һәр кем өсөн дә асыҡмы?

***Рәшит ШИРҒӘЗИН, БР Архив эштәре буйынса идаралыҡтың Үҙәк тарихи архив директоры:*** Әйткәндәй, тап ошо көндәрҙә Урал төбәгендә иң ҙур иҫәпләнгән беҙҙең дәүләт архивы ойошторолоуға 95 йыл тула, шуға күрә был рубрикала архив эштәре тураһында һөйләшеү ойоштороуҙы бик урынлы тип иҫәпләйем, рәхмәт иғтибарығыҙға. Беҙҙә барлығы 4 609 төр фонд һаҡлана. Уҡыу залыбыҙҙың буш торғаны ла юҡ: ғалимдар докторлыҡ, кандидатлыҡ диссертациялары өсөн бөртөкләп тигәндәй архив материалдары туплай, студенттар курс эштәре, дипломдар яҙа. Бынан тыш, тарихсылар, журналистар, үҙ төйәгенең үткәндәрен өйрәнеүсе, нәҫел-тамырҙарын барлаусы битараф булмаған һәүәҫкәрҙәр - бына кемдәрҙе йыш осратырға була беҙҙең уҡыу залында. Ошондағы мәғлүмәттәргә таянып, ҙур-ҙур хеҙмәттәр, монографиялар, белешмә йыйынтыҡтары яҙыла . Мәҫәлән, архив документтарынан әллә ни тиклем ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр туплап өлгөргән эшһөйәр ғалимыбыҙ мәрхүм Әнүәр Әсфәндийәровты мин хатта умартала бал ҡортона оҡшатып ҡуя торғайным. Ул бер ҙә иренмәне, ысын ғалим булды, ғүмеренең күп йылдарын архив залдарында үткәреп, халҡыбыҙға бик ҙур хеҙмәттәр ҡалдырҙы. Ун китаптан торған "Республика ауылдары тарихы", унан ҡала күрше Свердловск, Пермь, Һарытау, Һамар өлкәләрендәге башҡорт ауылдары тарихы буйынса китаптары, һуңғы хеҙмәттәренең береһе "Башҡорт тархандары" тигән тарихи йыйынтыҡтары ғына ла ни тора! Һәр ауылдың тип әйтерлек уға ҡасан һәм кем тарафынан нигеҙ һалыныуы, ниндәй ырыу-араға ҡарауы, билдәле шәхестәре тураһында һәм башҡа шундай бик күп ҡиммәтле мәғлүмәттәр бирелә. Шулай уҡ төпсөр тарихсылар булып танылған Рәмил Рәхимов, Салауат Хәмиҙуллин кеүек ғалимдарыбыҙ ҙа йылдар буйы ятҡан архив "ҡатламдарын" айҡап, бөртөкләп тигәндәй хәҡиҡәт ынйылары туплай. Беҙгә сит илдәрҙән дә йыш килеп тарих өйрәнәләр. Һуңғы йылдарҙа ырыу-нәҫелен юллап, шәжәрә тамырҙары менән ҡыҙыҡһынып килеүселәр күбәйҙе. Уларға эште еңеләйтеү маҡсатында боронғо перепись документтарының электрон варианттары булдырылды. Хәҙер теләгән кеше үҙен ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәтте интернеттан архив сайтын асып һә тигәнсе таба ала.

Архив материалдарын һаҡлау, тулыландырыу, иҫәпкә алыу, уны файҙаланыу кеүек эштәрҙән тыш, беҙ шулай уҡ мөрәжәғәт итеүселәрҙең элекке эш урындары, хеҙмәт хаҡы, стаж мәсьәләләре буйынса ла ярҙам күрһәтәбеҙ.

***Зәйнәп ҠОТДОСОВА, БР Йәмәғәт ойошмалары үҙәк архивының төп һаҡлаусыһы:*** Беҙҙең ҡарамаҡта совет йылдары осоронда ил менән етәкселек иткән коммунистар партияһы, шулай уҡ комсомол һәм профсоюз органдарының архив фондтары һаҡлана. Заманалар тамырынан үҙгәреш кисереп, хәҙер был власть органдарының исеме ҡағыҙҙа ғына тороп ҡалһа ла, ил менән һигеҙ тиҫтәләп йыл идара иткән системаның тарихын сүплеккә ырғытып булмай, сөнки бер үк ваҡытта уға илебеҙ, халҡыбыҙ яҙмышы ла үрелеп үҫкән. Теге йәки был уңай менән бәйле совет осоро ваҡиғаларына, билдәле шәхестәрҙең ҡаһарман яҙмыштарына ҡыҙыҡһыныуҙың һүрелгәне юҡ. Арабыҙҙа тарихҡа битараф булмағандарҙың байтаҡ булыуы ҡыуандыра. Беҙҙең архив материалдарына таянып, монографиялар, теге йәки был шәхестең тормош һәм хеҙмәт юлы йә булмаһа элек гөрләп эшләгән колхоз һәм совхоздар, сәнәғәт предприятиелары хаҡында, шулай уҡ бай үткәне һәм традициялары менән дан ҡаҙанған ауылдар, райондар тарихына йә юбилейына бағышлап китаптар нәшер ителә. Күп райондар юбилейҙары менән бәйле үҙ энциклопедияларын баҫтырып сығара башланы. Уларҙың авторҙары, тәбиғи, беҙҙең архив материалдарына мөрәжәғәт итә.

Икенсе яҡлап, архив халыҡҡа социаль-хоҡуҡи хеҙмәт күрһәтеүе менән дә бик мөһим эш башҡара, тигән фекерҙәмен. Бындай ярҙамға ҡайһы берәүҙәр бигерәк тә пенсияға сығыр алдынан мохтаж була. Стажды, элекке эш урынын йә хеҙмәт хаҡын раҫлатыу өсөн беҙҙә бөтөн тейешле документтар ҙа бар. Үткән быуат аҙаҡтарын хәтергә төшөрһәгеҙ, ул саҡ ниндәй генә "ООО" тип аталған ойошмалар, шәхси эшҡыуарлыҡ йәмғиәттәре юҡ ине! Йәғни "бер көнлөк" предприятиелар. Улар асылып өлгөрмәне, ябыла торҙо - күп кеше эшһеҙ ҡалды. Шул саҡта бер -нисә йыл эшләп ҡалыусылар хәҙер килеп стаж юлларға мәжбүр булалар. Беҙ мөрәжәғәт итеүселәргә архивта һаҡланған документтар нигеҙендә уларҙың эш стажын, хеҙмәт хаҡын раҫлап, белешмә бирергә вәкәләтлебеҙ. Был кешене булмаған предприятиеларҙы эҙләп, ҡырҡ тупһа тапап, стаж юллау ыҙаһынан ҡотҡара.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ТЫУҒАН АУЫЛ БАҺАҺЫН...

## унда йәшәүселәр күтәрә

**Республика райондарында әле яңы ғына гөрләп һабантуйҙар үтте. Бесәнгә, ураҡҡа төшкәнсе бер аҙ тынлыҡ урынлашырға тейеш һымаҡ та, беҙҙең халыҡ улай итә алмай шул. Уның байрамдары, бергә йыйылыр сәбәптәре бихисап. Бына әле лә Мәләүез районының Дәүләтҡол ауылы халҡы киң яланға оло байрам майҙанына йыйылды. Ул бер юлы бер нисә ваҡиғаға арналды: ауылдың 230 йыллығы, шәжәрә ағастары буйынса нәҫел-нәсәпте барлау, ошо данлы төбәктең данлыҡлы улы, яҙыусы, билдәле йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Булат Рафиҡовтың 80 йыллығы.**



**(Дауамы 4-се биттә).**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# БЕСӘЙҘӘР ӨСӨН... ҡунаҡхана



**Мин йорт хайуандары яратам. Бигерәк тә бесәйҙәр һәм эттәр менән тиҙ "уртаҡ тел" табам. Ҡалала күп фатирлы йортта йәшәгәндә лә өйөбөҙҙә ике бесәй булды, ә ҡала ситенә үҙ йортобоҙҙо төҙөп сыҡҡас, уларға тағы ла ике эт өҫтәлде.**

Минең хайуандарҙы яратыуымды белгән дуҫтарым үҙҙәре ҡайҙалыр киткән саҡта һәр ваҡыт бесәй, эт, попугай, балыҡ һәм башҡа хайуандарын беҙҙә ҡалдырып китә. Уларҙың ҡараулы, таҙа һәм һәр ваҡыт тамаҡтары туҡ булыуына ышанған дуҫтарым йорт хайуандары өсөн борсолмайынса, ялдарын матур итеп уҙғарып ҡайта.

Был хеҙмәтем өсөн дуҫтарымдан хаҡ алмаһам, ләкин уларҙың береһе минә ошо йүнәлештә аҡса эшләү юлын өйрәтте. Уның кәңәшен тыңланым һәм йорт хайуандары өсөн ҡунаҡхана астым. Иң тәүҙә өйҙә хайуандарҙы тотоу өсөн тейешле шарттар булдырҙым, йәғни ваҡытлыса йәшәп торорлоҡ ситлектәр (эттәргә урамда йыйыла вольерҙар эшләттем), ашатыу һәм һыу эсереү өсөн махсус һауыттар, шулай уҡ башҡа кәрәк-яраҡтар һатып алдым. Ә балыҡ, попугай, алйырҙан һәм башҡа ошондай ваҡ йорт хайуандары, ғәҙәттә, үҙ аквариумынан һәм ситлегенән сығарылмай.

Ҡунаҡхана асыуыма күп ваҡыт та үтмәне, эштәрем алға китте. Бының өсөн хаҡтарҙы тешләшерлек итеп ҡуймайым, даими клиенттарыма ташламалар яһайым. Мәҫәлән, дог, ротвейлер һәм башҡа ошондай ҙур тоҡомло эттәр өсөн ҡунаҡханала "йәшәү" хаҡы тәүлегенә 400 һум. Бәләкәйерәк эттәр иһә 350 һумға "номер" ала. Бесәйҙәр өсөн хаҡ - 250 һумға, эре кимереүселәргә - 150 һумға, ҡоштарға 50 һумға төшә. Шулай итеп, ҡунаҡханала бер айҙа бер-нисә эт, бесәй булған осраҡта ла килем арыу ғына була. Йорт хайуандары хужалары араһында был хеҙмәт ҙур һорау менән файҙалана. Улар туғандарын, күршеләрен йәки таныштарын борсоп, этбесәйҙәрен ҡарап тороуҙы һорап йөрөмәй, ә бөтә шарттар ҙа булдырылған ергә алып килә һәм тыныс ҡына үҙ эштәре менән була.

Быны ошондай юл менән ғаиләбеҙ бюджетын тулыландырам. Минең кеүек йорт хайуандарын яратыусылар, бәлки, минең миҫалды ҡолаҡтарына элер һәм үҙҙәре лә ошо эшкә тотонор. Әлбиттә, ҡала ситендә йәшәүселәргә был йәһәттән һәйбәтерәк, сөнки иркенлек бар. Шулай ҙа ҡала фатирҙарында көн итеүселәргә лә юлын табырға мөмкин. Улар ғаилә ағзаларын бимазалап, ҙур эт йәки бесәй алып ҡалмаҫҡа, ә эшмәкәрлектәрен ҡоштар һәм бәләкәй кимереүселәр менән бәйләргә мөмкиндәр.

Фатима ИСМӘҒИЛЕВА.
Өфө ҡалаһы.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бай тарихыбыҙҙы туплап һаҡлаусы архивтар бөгөн ни менән мәшғүл, уларҙың ишектәре һәр кем өсөн дә асыҡмы?

(Башы 1-се биттә).

*Азат ЯРМУЛЛИН, тарихсы:* Эшем һәм шулай уҡ йөрәгем ҡушыуы буйынса ла минә архивта йыш шөғөлләнергә тура килә. Үҙе бер мауыҡтырғыс донъя бит ул боронғолоҡ аңҡып торған архив ҡағыҙҙары! Үткәнебеҙҙең тере шаһиттары - ҡулъяҙмалар, биттәре һарғайып, тыштары туҙа төшһә лә бер ниндәй хазинаға биргеһеҙ, донъяла берҙән-бер дана тороп ҡалған библиографик табыш - баҫмалар, ғәрәп, латин хәрефтәре менән сыбарланған гәзит төпләмәләре...Нисә тапҡыр барып инһәң дә архив диуарҙары эсенә йәшеренгән серлелеккә, тере тарихтың бәғерге килеп бәргән тәрән һулышына күнегеүе мөмкин түгел. Ул һәр саҡ тетрәтә күңелде, һиҫкәндерә, уйландыра. Минең өсөн тыуған йорт, мәсет кеүек изге урындарҙың береһе ул данлы ла, ҡанлы ла тарихыбыҙ һаҡланыусы был бина. Мине, нигеҙҙә, халҡыбыҙҙың хәрби даны, уның ҡаһарманлыҡ тарихы ҡыҙыҡһындыра. Ирек һөйгән халҡыбыҙ бер ҡасан да башлап яу сапмаған, ил-йорт баҫмаған, фәҡәт үҙ азатлығын, йорт-ерен, ғаиләһен һаҡлап алышҡа сыҡҡан. Был ҡоро һүҙ түгел, ә архив документтары нигеҙендә лә раҫлана килгән хәҡиҡәт. Архив кәштәләрендәге документтарҙың ҡиммәте - уның ҡәҙерен белгән кешегә баһалап бөткөһөҙ байлыҡ. Минең уйымса, ата-бабалары рухына, халҡы, иле яҙмышына битараф булмаған кеше иң тәүҙә үҙенең нәҫел тамырҙары - шәжәрәһе менән ҡыҙыҡһынырға, нәҫел "ағасы" армыттарын юлап, төрлө сығанаҡтарға, шул иҫәптән ғүмерендә бер тапҡыр булһа ла архивҡа инеп, бөртөкләп мәғлүмәттәр тупларға тейештәр. Ә инде тарихсылар, ғалимдар һәм мәктәптәрҙә ошо фәндән уҡытыусылар өсөн архив залдары күнегелгән эш урынылыр, тип уйлайым.

"Автономиялы Башҡортостан байрағы аҫтында" тип аталған тәүге китабым тап ана шул архив материалдарында соҡсоноп, тарихыбыҙҙың өнһөҙ шаһиттары - тәү сығанаҡ документтарын ентекләп өйрәнеү һөҙөмтәһендә яҙылды. Йөрәгән аяҡҡа йүрмә эләгә, тигәндәй, эш ыңғайында тағы ла бик күп ҡыҙыҡлы, әһәмиәтле факттарға юлығаһың, әллә күпме кеше яҙмыштарын күңелең, йөрәгең аша үткәрәһең - ҡыҫҡаһы, өйрәнәм, эшләйем, тигән кешегә архивтарыбыҙҙа эш етерлек. Халҡыбыҙҙың данлы ла, шанлы ла яҙмышы тураһында бәйән итеүсе мәғлүмәттәр архив кәштәләрендә һаҡланып ятмаһын, тарихыбыҙҙа билдәһеҙ "аҡ таптар" булмаһын, тигән кешеләр өсөн республикабыҙ архивтары ишектәре һәр саҡ асыҡ - халҡыбыҙ тарихын халҡыбыҙға ҡайтарайыҡ, тип әйтмәксемен.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ араһында 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға оноҡҡандар барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе әле: гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башлау мөмкинлеге бар. Уның өсөн 17 августҡа тиклем почта бүлексәләренә барып, 50665 индексы гәзитебеҙгә яҙылып ҡуйындар. Дүрт айға яҙылыу хаҡы 338 һум 40 тингә генә төшәсәк.**

● Шулай уҡ августан "Киске Өфө" гәзитенә 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн дә яҙылырға мөмкин. Яҙылыу миҙгеленең һәр айында уҡыусыларыбыҙ өсөн дөртләндереү сараһы барлығын да беләһегеҙ: был юлы ла **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"; "История башкирского народа"; С. Руденконың "Башкиры"; Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"; 2015 йылға "Башҡортса дини календарь"** һәм башҡа китаптарға лайыҡ булырға теләгәндәр 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәрергә онотмаһын.



● Ә кемдәрҙә бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ.**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **336 һумға** яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (көмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға **246 һум.**

● Яҡын йәшәгәндәр редакцияибыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **246 һум.**

**Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн онлайн яҙылыу (534 һум 42 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкҡа үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тартлар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● **Беҙҙең сайт:** *www.kiskeufa.ru.* Беҙҙең электрон почта: *info@kiskeufa.ru.* Беҙҙең блог: *blog.kiskeufa.ru.*

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

МӨХӘРРИРИӘТ.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Мәскәүҙең "Крылатское" Олимпия уҡыу-спорт үҙәгендә Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитовтың РФ спорт министры Виталий Мутко һәм Халыҡ-ара каноэ федерацияһы президенты, Бөтә донъя уйындары Халыҡ-ара ассоциацияһы етәкселе Хосе Перурена Лопез менән осрашыуы үтте. Осрашыу барышында Өфөнөң 2021 йылда Бөтә донъя уйындарын үткәреү буйынса кандидатҡала булараҡ тәҡдим ителеүе мәсьәләһе ҡаралды. Хосе Перурена билдәләүенсә, Бөтә донъя уйындарын үткәреү хоҡуғы яулау буйынса конкурсҡа старт бирелгән. Был хоҡуҡҡа Өфөнән башҡа Перуның баш ҡалаһы Лима һәм АҠШ-тың Алабама штаты Бирмингем ҡалаһы дәғүә итә. Комиссия Уйындар өсөн спорт ҡоролмалары етерлек булған ҡаланы һайлаясаҡ, һәм был йәһәттән Өфөнөң енеүгә тулы нигеҙе бар.

✓Ошо көндәрҙә "Әсәлек даны" миҙалына биш һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән тағы 54 ҡатын-ҡыҙ лайыҡ булды. Физаҡәрлек билдәһен һәм аҡсалата премияны әсәләр БР Хөкүмәте вице-премьеры Лилиә Ғүмәрова ҡулынан алды. Төрлө йылдарҙа ошондай юғары награданы республикала 6,5 меңләп ҡатын-ҡыҙ алды. Уларға социаль түләүҙәр өсөн республика бюджетынан йыл да 3 миллиардтан ашыу һум аҡса бүленә, туғыҙ һәм унан да күберәк бала аҫыраған ғаиләләргә "ГАЗель" микроавтобусы бирелә. Торлаҡ мәсьәләләрен хәл итеү өсөн 200 күп балалы ғаилә сертификаттар алған. Бер сертификаттың уртаса хаҡы - 3 миллион һум тирәһе.

✓Бөгөн республиканың төҙөлөш комплексында 100 меңләп кеше эшләй. Был көндәрҙә улар үҙҙәренең профессиональ байрамын билдәләне. Ошо айҡанлы 50-ләп кеше Башҡортостандың дәүләт наградаларын алды. 23 кеше Башҡортостан Республикаһының Маҡтау грамотаһына, 27 кеше республиканың атҡаҙанған төҙөүсеһе исеменә лайыҡ булды.

✓Башҡортостанда 160 ауыл "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыуға ғариза бирҙе. Был хаҡта республика Хөкүмәтендә үткән ултырышта иғлан ителде. Ултырышты конкурстың ойоштороу комитеты рәйесе вице-премьер Лилиә Ғүмәрова алып барҙы. Билдәләнеүенсә, былтыр Башҡортостан Хөкүмәте һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ойоштороған "Айыҡ ауыл" конкурсында 85 ауыл ҡатнашһа, уға ҡыҙыҡһыныу йылдан-йыл арта. Быйыл ауылдар өсөн үткәрелгән был акцияға Сибай, Стәрлетамаҡ һәм Күмертау ҡалалары ла ҡушылды. Еңеүселәр 12 номинация буйынса билдәләнәсәк.

*КӨНАУАЗ*

# БАШҠАЛАРҒА ТҮҘЕР ӨСӨН...

## тәүҙә үҙеңде яратырға кәрәк

**Башҡортостанға Украинаның һуғыш барған өлкәләренән ҡасаҡтар килеүен дауам итә. Дәүләт етәкселегенең ҡарарына ярашлы, Башҡортостан 5000 ҡасаҡты һыйындырырға әҙер. Украинала килеп тыуған хәл-торошҡа тамырҙары Мәләүез районының Аптыраҡ ауылынан булған яҡташыбыҙ, "Украина башҡорттары ҡоролтайы" йәмғиәте рәйесе Дамир Солтанғоловтан баһа биреүен үтендек.**



- Шулай килеп сыҡты - ярты ғүмеремде Чукоткала үткәрергә тура килде. Чернобыль фажиғәһенән һуң Киевҡа барып төпләндек. Элек Украинала тотороҡлолоҡ бар ине. Ул СССР тарҡалғанға тиклем дауам итте. Һуңынан ил етәкселеге бығаса барған юлынан тайпылып, икенсе юлдан китте. Күрше туғандаш Рәсәй халҡы менән яҡынлашыу урынына Европаға йөҙ борҙо. Һәм был иң ҙур хата булды ла инде. Элек хатта Башҡортостан менән Украина предприятиелары тығыҙ бәйләнештә эшләһә, бындай мөнәсәбәттәр юҡҡа сыҡты, һөҙөмтәлә ҡайһы бер заводтар ябылды, күптәре банкротҡа әйләнде.

Барыһы ла беренсе президент Леонид Кравчуктан башланды. Кучма ла күп нәмә вәғәҙә итте, әммә бер нәмә лә эшләмәне. Артабанғы президенттар ҙа уларҙың юлын дауам итеп, буш вәғәҙәләр менән һыйланы. Һөҙөмтәне үҙегеҙ күреп тораһығыҙ - туған-туғанды үлтергән граждандар һуғышы башланды. Бер ғәйепһеҙ кешеләр һәләк була. Уны, әлбиттә, яңы президент Петр Порошенко туҡтата ала, ләкин бөгөн ул да күршеләр менән түгел, ә американдар менән кәңәшләшә. Улар уға үҙҙәренең сәйәсәтен көсләп таға. Дөрөҫөн әйткәндә, Порошенко - ул марионетка ғына. Шуға күрә, тыныслыҡ тураһында килешеү төҙөү урынына ғәскәр индереп, йәш егеттәрҙе ҡыра.

Украинала башҡорттар, яҡташтар бар һәм улар менән даими бәйләнештә торабыҙ. Уларҙың барыһы ла һуғышҡа ҡаршы. Ҡайһы берҙәре тарихи тыуған иленә - Башҡортостанына ҡайтырға ла риза, әммә ғүмер буйы йыйған донъяһын, туғандарын, балаларын, ейәндәрен ҡалдырып киткеләре килмәй. Миненсә, Луганск өлкәһендә йәшәүселәр фекерҙәрен үҙгәртер, тип уйлайым. Сөнки йорт эргәндә генә шартлауҙар яңғырағанда, көн һайын өйөндөң эргәһенән танкылар йөрөгәндә, ҡасан пуля килеп тейер икән, тип, һәр саҡ хәүеф аҫтында йәшәп булмай. Күптәр Донецктан Ҡырымға күсенеп килде. Быға тиклем дә Ҡырымға бик күп ҡасаҡ килгәйне. Барыбыҙ ҙа бик ҡайғырабыҙ, артабан нисек булыр икән тип көйәләнәбеҙ, ләкин һаман да яҡшыға өмөтләнәбеҙ.

Төрлө матбуғат саралары мәғлүмәттәрен тыңлаһаң, уларҙан бары тик Рәсәй каналдарының ғына ысынбарлыҡты яҡтыртырға тырышыуына инанаһың. Европа каналдары тулыһынса алдаҡҡа ҡоролған. Украина каналдарына килгәндә инде, улар үлеүселәрҙең аныҡ һанын кәметә. Әгәр меңләгән кеше үлеп, улар тиҫтәләгән һалдат үлде, ти икән, был, әлбиттә, ғәҙел түгел. Хатта һалдаттарға ҡарата ла ғәҙел түгел. Шәхсән үҙемә улын эҙләргә барған бер кеше уны соҡор эсенән табып алыуын һөйләне. Үлеүселәрҙе хатта күмеп тә тормайҙар, соҡорҙарға ташлайҙар ҙа ҡуялар. Туғандар ҡәберлеге эшләйҙәр. Беҙҙең заманда бындай башбаштаҡлыҡ һәм тәртипһеҙлек - бик ҡурҡыныс һәм хәүефле.

Порошенконы ла ниммәләлер ғәйепләп булмай, ул бит һуғыштар башланғас ҡына президент итеп һайланды. Әгәр ул дөрөҫ ҡарар ҡабул итһә, барыһы ла яҡшы буласағына өмөт бар. Сөнки ул - эшҡыуар, Рәсәйҙә уның бизнесы - шоколад фабрикалары бар, шунан сығып булһа ла, ул күршеләр менән тыныс йәшәргә кәрәклеген аңларға тейеш. Шуға ла һуғышты туҡтатыр, тигән өмөт бар.

Дөрөҫөн әйткәндә, был ваҡиғалар бер бөгөн генә килеп тыуманы, ул Ющенко ваҡытында уҡ тамырланғайны инде. Ҡәнәғәтһеҙлек, сигенә етеп, бөгөн шеш кеүек һытылды. Сөнки Донецк, Луганск өлкәләрендә, нигеҙҙә, рус телле халыҡ йәшәй. Унда Башҡортостандан да шахтерҙар ғаиләләре бик күп. Әммә Украина дәүләте рус һәм башҡа милләттәрҙең матди мохтажлыҡтары менән дә, милли талаптары менән дә иҫәпләшергә теләмәй. Был йәштәр араһында хушкүңеллелеккә, хатта үҙ милләтен танымауға килтерә. Мәҫәлән, тамырҙары башҡорт булғандар ҙа үҙҙәрен украин тип әйтергә мөмкин. Нигеҙҙә, бындай күренештәр киң таралған.

Ғөмүмән, ниндәй илдә йәшәүгә ҡарамаҫтан балаларҙа тыуған иленә, тамырҙарына һөйөү тәрбиәләргә кәрәк. Сөнки Аллаһы Тәғәлә барыбыҙҙы ла бер тиң итеп яралтҡан һәм барыбыҙҙы ла бер тиң итеп ярата. Әҙәм балаһына ошо хәҡиҡәтте оноторға ярамай: башҡаларға түҙемле булыу өсөн, тәүҙә үҙеңде яратырға өйрәнергә кәрәк. Кире осраҡта ниндәй эҙемтәләр килеп тыуыуын Украиналағы хәл-ваҡиғалар яҡшы күрһәтте. Аҡыллыға ишара был.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАШҠОРТОСТАНЫМА ҠАЙТЫУ...

## хажға барыу менән бәрәбәр

**Муса НУРДӘҮЛӘТОВ, Мари Иле Республикаһы Йошкар-Ола ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:** Оҙаҡ йылдар Башҡортостандан ситтә йәшәгәнгә күрә, милләттәштәремә әйтер һүҙем бер генә - ниндәй мөхиттә лә үҙегеҙҙә башҡортлоҡ рухын һаҡлап ҡалырға тырышығыҙ. Йошкар-Ола ҡалаһының уртаһында туғыҙ йортта йәшәүсе ҡала халҡы өсөн бер почта хеҙмәткәре эшләй. Ул хәҙер мине белеп бөткән, бер миңә генә ул "Башҡортостан", "Аҙна" гәзиттәрен, "Ватандаш" журналын алып килә. Бер ваҡыт унан: "Тағы ниндәй халыҡтар бында туған телендә гәзит-журналдар алдыра?" - тип һораным. Баҡтиһәң, бындай кеше бер мин генә икән. Ошо саҡ шундай һығымтаға килдем: тик хайуандар ғына туған телендә баҫмалар уҡымай, сөнки улар уҡый белмәй. Беҙ ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, йәшәһәк тә, башҡортса уҡырға, яҙырға бурыслыбыҙ. Хатта СМС-хәбәр яҙғанда кәрәҙле телефонда башҡорт шрифты юҡ икән, уны махсус символдар менән алыштырып яҙырға мөмкин. Бынан тыш, башҡортлоғоң һинең ҡурай уйнай белеүеңдә лә сағыла. Сит ерҙәрҙә ҡулыңда ҡурайың булмаһа, егерме адвокатың булһа ла, һин башҡорт икәнлегеңде иҫбатлай алмайһың. Ә ҡурайҙа уйнай белеү, өйрәтеү өсөн ир баланың милли ғорурлыҡ тойғоһон һуңынан уҡытыусыһыҙ, үҙаллы өйрәнерлек итеп шул тиклем юғары кимәлгә күтәрергә кәрәк...

Башҡортостанға һирәк кенә ҡайтҡанымда милләттәштәрем менән туйғансы һөйләшеп ҡалыр өсөн ҡала урамдары буйлап йөрөргә сығам. Ғөмүмән, сит илдәргә ял итергә йөрөү урынына тағы бер ҡабат Башҡортостаныма ҡайтыуҙы хуп күрәм. Башҡортостаныма ҡайтып килеү минең өсөн хажға барыуҙан да мәртәбәлерәк кеүек. Ситтә йәшәүсе бүтән милләттәштәрем дә был хәҡиҡәткә төшөнгәндер күптән, әммә ата-бабалар ерендә донъя көтөүсе бәхетле башҡорттарым да ер ҡәҙерен, ил ҡәҙерен белһендәр ине.

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Урындағы инициативаларҙы хуплау проекты буйынса конкурстың еңеүселәре билдәләнде. Һөҙөмтәлә республиканың 69 ауыл биләмәһе үҙ проекттарын тормошҡа ашырыуға субсидиялар алды. Конкурсҡа килгән проекттарҙың күпселеге юлдарҙы, мәҙәниәт йорттарын ремонтлауға, зыяраттарҙы төҙөкләндереүгә, балалар майҙансыҡтарын рәткә килтереүгә арналды. Шулай итеп, был проекттар өсөн республика бюджетынан 60 млн һум аҡса бүленде. Урындағы муниципалитеттар, эшҡыуарҙар берлеге проекттарҙы тормошҡа ашырыуға тағы 42 млн һум өҫтәйәсәк, тип билдәләнде. Иң күп еңеүсе проекттар Учалы, Ейәнсура һәм Йылайыр райондарынан.

✓Ошоға тиклем баш ҡала округы хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтенә етәкселек иткән Оскар Фазлыев Өфөнөң электротранспорт идаралығы начальнигы итеп тәғәйенләнде.

✓Рәсәйҙә 6 августан берҙәм Юғары суд эшләй башланы. Ул Юғары һәм Арбитраж судтарҙы берләштереүҙән барлыҡҡа килде. Бындай аҙым бер үк эштәр буйынса төрлө юрисдикциялағы судтарҙың төрлө ҡарарҙар сығарыуын иҫкәртеү, суд практикаһын берҙәм итеү маҡсатынан сығып эшләнде. Рәсәйҙең Берҙәм Юғары суды рәйесе итеп Вячеслав Лебедев тәғәйенләнде.

✓Хәйбулла районы Аҡъяр телевидениеһы "Изге йөрәк" исемле проекты өсөн федераль бюджеттан 342 мең һумлыҡ грант аласаҡ. Был аҡса телевизион проект эшен камиллаштырыу ҡоролмалары алыу өсөн тотоноласаҡ.

✓Силәбе өлкәһендә башҡорт йәштәренең "Йәштәр йыйыны - 2014" төбәк-ара форумы булып үтте. Силәбе өлкәһенең Башҡорт йәштәре берлеге ойошторған был сарала илдең төрлө төбәктәренән, шулай уҡ Башҡортостан йәштәре лә ҡатнашты. Форумға йыйылыусылар туған телде һәм мәҙәниәтте үҫтереү, һаҡлау, башҡорт брендын булдырыу, башҡорт йәштәре йәмәғәт ойошмаларының финанс бойондороҡһоҙлоғона өлгәшеү, уларҙың үҙ-ара бәйләнеше мәсьәләләре тураһында фекер алышты.

✓Беларусь республикаһында үҫмерҙәр араһында халыҡ-ара шашка буйынса Европа беренселеге тамамланды. 19 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар араһында Өфөнән Кристина Осипова менән Айгөл Иҙрисова призлы урындар яуланы. Малайҙарыбыҙ ҙа яҡшы сығыш яһаны. Шулай итеп, башҡортостандар Рәсәй командаһына ике алтын, ике көмөш, ике бронза миҙал яулашты.

✓ *1999 йылдан район хакимиәте тарафынан да әҙәбиәт, сәнғәт һәм журналистика өлкәһендә намыҫлы эшләгәндәргә яҡташыбыҙ исемендәге премия булдырылды. Ошо ваҡыттан алып был премияға 13 кеше лайыҡ булды.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## МӘСЕТТӘР ҺӘМ ҠОРАМДАР...

**Ирекмәндәр баш ҡаланың мәсеттәре һәм ҡорамдарын балалар өсөн буяу китапсыҡтары формаһында эшләгән. М. А. Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университетының Өфө филиалы студенттары был эштәрен Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыныуҙың 440 йыллығына арнай. Китапсыҡтарҙы тәүгеләрҙән булып Ҡаланың балалар һәм үҫмерҙәр өсөн социаль приюты тәрбиәләнеүселәре баһаланы.**

Студенттар приютта "Бала саҡтың ҡояшлы төҫтәре" тип аталған мәрхәмәтлек арт-проектын тормошҡа ашыра һәм балалар өсөн рәсем төшөрөү буйынса даими дәрестәр алып бара. Сираттағы дәрестә балалар баш ҡаланың изге йорттары менән танышты. Ижад барышында студенттар уларҙы тарихи-архитектура ҡоролмалары менән таныштырып ҡына ҡалманы, традицион диндәр тураһында мәғлүмәт бирҙе, уларға ингәс, үҙеңде нисек тотоу ҡағиҙәләре хаҡында һөйләне.

Август-сентябрҙә был китапсыҡтарҙы ирекмәндәр ауыр хәл-торошта булған балаларға һәм республиканың башҡа балалар йорттарына таратырға ниәтләй.

## УРАМДАР МАТУРАЯ

**Баш ҡаланың иң "ҡарт" тип иҫәпләнгән Ленин урамында былтыр киң масштаблы төҙөкләндереү эштәре башланғайны. Әлеге ваҡытта Башҡорт дәүләт медицина университеты эргәһендәге скверҙа эштәр тамамланыу алдында тора. Унда тротуар плиткаһы алмаштырылды, күптән түгел генә матур фонарҙар эленде. Улар сүкелгән биҙәктәр менән биҙәлгән. Шундай уҡ стилдә эшләнгән эскәмйәләр һәм сүп һауыттары урынлаштырылды. Тиҙҙән бында газон һалынасаҡ.**

Әйткәндәй, төҙөкләндереү эштәре башҡа урамдарҙа ла һәм комплекслы алып барыла. Уларҙы тейешле киңлеккәсә киңәйтеү менән бер рәттән, ағастар ултыртыла, йәйәүлеләр өсөн юлдар матурлап эшләнә. Мәҫәлән, Мәжит Ғафури исемендәге урамды ремонтлағанда эшҡыуарҙар ҙа үҙ өлөшөн индергән. Улар үҙҙәренең магазиндарына инеү урындарын, фасадтарҙы яңыртҡан, заманса яҡтыртыу йыһаздары ҡуйған. "Телеүҙәк" туҡталышындағы павильон да күҙгә күренеп матурайған. Баш ҡаланың икенсе өлөшөндә, Гвардейская урамында ла эш ҡайнай. Был урам Шаҡша ҡасабаһында үҙәк урам булып тора, әммә быға саҡлы уға етди иғтибар бирелмәгән. Былтыр муниципалитет бында ла төҙөкләндереү эштәре башлаған һәм ул көҙгә тамамланырға тейеш.

## ЯҢЫ ДИАЛИЗ ҮҘӘГЕ

**Ай башында Шәфиев һәм Рихард Зорге урамдары киҫелешендә яңы диализ үҙәге нигеҙенә беренсе таш һалынды. Проект Германияның "FreseniusMedicalCare" концерны менән "Гемодиализ лабораторияһы" яуаплылығы сикләнгән ширҡәтенең Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ярҙамындағы хеҙмәттәшлеге нигеҙендә тормошҡа ашырыла.**

Был шәхси-дәүләт партнерлығы рәүешендә тормошҡа ашырылған проект республика халҡына ваҡытында һәм заманса медицина ярҙамы алыу мөмкинлеген бирәсәк. Буласаҡ үҙәктең майҙаны 3000 квадрат метр. Ул 40 юғары технологиялы "яһалма бөйөр" аппараты менән йыһазландырыласаҡ. Инвесторҙар фекеренсә, бындай күләмдәге медицина ҡорамалы төбәктең алмаштырыусы бөйөр терапияһына ихтыяжын тулыһынса ҡәнәғәтләндерәсәк.

Төҙөлөшкә йүнәлтелгән дөйөм инвестиция күләме 300 миллион һум самаһы. Яңы үҙәк тәүге пациенттарын 2016 йылда ҡабул итә башлаясаҡ тип планлаштырыла. Ауырыуҙар өсөн барлыҡ хеҙмәттәр бушлай буласаҡ, сөнки "Гемодиализ лабораторияһы" ЯСШ-һы дәүләт гарантиялары программаһы сиктәрендә мотлаҡ медицина страховкаһы системаһында эшләй.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ТЫУҒАН АУЫЛ БАҺАҺЫН...

## унда йәшәүселәр күтәрә

(Башы 1-се биттә).

Булат ағай Рафиҡов халҡына намыҫлы хеҙмәт иткән, тарихҡа сикһеҙ тоғролоҡ һаҡлаған, тәрән белемле, тәбиғи һәләтле һәм тынғыһыҙ йөрәкле шәхес булыуы менән хәтергә уйылып ҡалған. Бөгөн райондың Корнеевка мәктәбе уның исемен йөрөтә, унда уның бюсы ҡуйылған. Йыл һайын белем биреү учреждениеһының алдынғы уҡыусыларына, спортсыларға, район һәм мәктәптең йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнашыусыларға ҡыҙҙары Гөлназ һәм Гөлсәсәк ойоштороған Булат Рафиҡов исемендәге премия бирелә. 1999 йылдан район хакимиәте тарафынан да әҙәбиәт, сәнғәт һәм журналистика өлкәһендә намыҫлы эшләгәндәргә яҡташыбыҙ исемендәге премия булдырылды. Ошо ваҡыттан алып был премияға 13 кеше лайыҡ булды. Был юлы Булат Рафиҡов исемендәге премия алты китап авторы, һәләтле яҙыусы Сәлмән Яҡуповҡа тапшырылды. Быйыл ғына булдырылған премияның миҙалы беренсе булып уға, шулай уҡ премияның быға тиклемге лауреаттары - скульптор Фәрит Мөстәҡимовҡа, "Мәләүез таңдары" әҙәби берекмәһе етәксеһе Мәрйәм Күсмәеваға, үҙешмәкәр композитор, рәссам Фәнил Яманаевҡа, Булат Рафиҡовтың уҡыусыһы Роза Хәмзинаға, Рәфҡәт Айытҡоловҡа һәм башҡаларға тапшырылды.

Был көндә Булат Заһретдин улының тыуған йортонда мемориаль таҡта асылды. Ул йортта бөгөн яҙыусының ҡустыһы, III Дәрәжә Хеҙмәт Даны ордены кавалеры, 35 йылдан ашыу тыуған колхозында механизатор булып эшләгән Риф ағай Рафиҡов йәшәй.

Артабанғы саралар ауыл янындағы Сәләғәй күле тип аталған матур аҡланда дауам итте. Ҡунаҡтар - шағир, БДУ профессоры Фәнил Күзбәков, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты Советы ағзаһы, "Киске Өфө" гәзите баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Дәүләтҡол ауылында тыуып үҫеп, әле Мәскәүҙә йәшәгән авиация полковнигы Зөбәйер Иҫәнғолов, Башҡортостандың һәм Татарстандың атҡаҙанған артисы Гөлсөм Иҫәнғолова, Булат Рафиҡовтың ҡыҙҙары Гөлназ һәм Гөлсәсәк, ейәне Юлдаш, юрматы ырыуы вәкилдәре һәм башҡалар Дәүләтҡолдоң нигеҙен тәшкил иткән Көҫәпҡоловтар, Йәмилевтар, Рафиҡовтар, Рахманғоловтар, Сәхиевтар, Һөйәрғоловтар, Дилмөхәмәтовтарҙың ғаилә шәжәрәләре менән таныштылар, улар әҙерләгән милли ризыҡтарҙан ауыҙ итте, сығыштарын тыңланы. Шунан барыһы ла сәхнә янына йыйылды.

Күркәм байрамды асып, район хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Геннадий Шлычков дәүләтҡолдарҙы байрам менән ҡотланы, уға әҙерлек барышында башҡарылған мөһим эштәргә туҡталды. Ауыл халҡы өсөн иң мөһиме, әлбиттә, мәҙәниәт усағына капиталь ремонт үткәрелеү, уның тирәяғын кәртәләү булды. Геннадий Шлычков ауылдағы бындай төҙөкләндереү эштәре артабан да дауам итәсәге, дәүләтҡолдарҙың "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашыуы идеяһының хуплап ҡаршы алыныуы, уның сиктәрендә лә ниндәйҙер ярҙам күрһәтеләсәге тураһында билдәләне.

Артабан сәхнәгә Дәүләтҡол ауылы старостаһы, Ленин, Октябрь революцияһы, Почет билдәһе ордендары кавалеры Тәлғәт Көҫәпҡолов, хеҙмәт ветераны, ун бала тәрбиәләп үҫтергән Герой-әсә Наилә Йәмилева, "Ашҡаҙар" ауыл хужалығы кооперативы рәйесе Илдус Хәлитов, Дәүләтҡол ауылы клубы мөдире Хәҙисә Низамова сыҡты. Уларға Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Маҡтау грамоталары тапшырылды.

Корнеевка ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Татьяна Михайлова дәүләтҡолдар башҡа тораҡ пункттарҙа йәшәүселәрҙән берҙәмлеге, уңғанлығы, тыуған төйәктәренә тоғролоғо менән айырылып тороуы хаҡында һоҡланып һөйләне һәм ил-йортҡа терәк булған, фиҙаҡәр хеҙмәте менән ауылды данлаған кешеләрҙе ҡотлап, бүләктәр тапшырҙы. Татьяна Михайлова Дәүләтҡолда йәшәгәндәрҙең бөтәһе лә тиерлек оло хөрмәткә, ошондай бүләктәргә лайыҡ булыуы тураһында айырып әйтте. Бәләкәй генә ауыл кешеләренә бирелгән ошо баһа тотош халҡыбыҙға баһа булып яңғыраны. Сөнки халыҡты, милләтте уның бер вәкиле, бер ауылы ла күтәрә, таныта ала бит.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**



## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә 7-10 октябрҙә ШОС илдәре делегацияһы ҡатнашлығында Йәштәр инновация форумы үткәреләсәк. Унда 35 йәшкә тиклемге инновацион проекттар авторҙары, стартапҡа нигеҙ һалыусылар ҡатнаша ала. Ғаризалар 20 сентябргә тиклем ҡабул ителә.

✓Асҡын районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты эргәһендә "Ағинәйҙәр ҡоро" төҙөлдө. Ойоштороу йыйынында райондың ғаилә һәм тәрбиә мәсьәләләренә битараф булмаған ҡатын-ҡыҙҙары ҡатнашты. Уларҙың иң өлкәненә, Хәнә Тимербаеваға -82 йәш, иң йәшенә, биш бала әсәһе Гөлшат Ғимаеваға 40 йәш ине. Билдәләнеүенсә, "Ағинәйҙәр ҡоро"нда ағза булып тороусылар йәш буйынса сикләнмәгән, уларҙың башҡаларҙы үҙ артынан эйәртерлек, үҙ һүҙенә ҡолаҡ һалдырырлыҡ матур сифаттарға эйә булыуы шарт. Бары тик шундай ҡатын-ҡыҙ ғына үҙе йәшәгән төбәктең йәшәйешенә, йәштәр, балалар тәрбиәһенә, ауылдар яҙмышына битараф ҡала алмай, ошо тәңгәлдәге хәлдәрҙе яҡшыртыу өсөн үҙенең ҡулынан килгәнде эшләй ала.

✓БР Төбәк-ара Мәғлүмәттәрҙе эшкәртеү үҙәге быйылғы БДИ һөҙөмтәләре буйынса ҡыҫҡаса аналитик ҡулланма баҫтырҙы. Үҙәктең директоры А. Блинов әйтеүенсә, БДИ һынауҙарында Өфөнөң биш - Киров, Ленин, Калинин, Дим һәм Октябрь райондары, шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Октябрьский ҡалалары, Туймазы, Шишмә райондары мәктәптәре юғары күрһәткестәргә өлгәшкән.

✓11-17 августа йылылыҡ магистралдәрендә ремонт эштәре үткәрелеү сәбәпле Шаҡша биҫтәһенең ҡайһы бер урамдарында урынлашҡан торлаҡ йорттарҙа йылы һыу булмаясаҡ. Гидравлик һынауҙар Октябрь проспектында ла үтә. Унда ла ҡайһы бер йорттар йылы һыуһыҙ ҡаласаҡ. 17 августа тиклем шулай уҡ Октябрҙең 50 йыллығы исемендәге, 8 Март, Әй, Киров урамдары йорттарында ла йылы һыу булмаясаҡ.

✓Башҡортостандың өс районында - Хәйбулла, Учалы, Белоретта бөжәктәр һөжүме айҡанлы индерелгән ғәҙәттән тыш режим кисектерелде. Ғәҙәттән тыш хәл әле Баймаҡ һәм Йылайыр райондарында һаҡлана. Баймаҡта был ҡоротҡостар 80 мең гектар майҙанды биләп алғайны, ул майҙандың 43,5 процентында химик эшкәртеү үткәрелгән. Йылайырҙа 7 мең гектар майҙан ошо ҡоротҡостар һөжүменә дусар булды.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

**Эшкә урынлашҡанда һәр кем эш хаҡына иғтибар итеп, уны иҫәпләү механизмын иҫтән сығара. Күптәр иһә рәсми булмаған эш хаҡы үҙҙәренең үк социаль яҡлаулы булыуына кире йоғонто яһауы хаҡында уйлап та бирмәй. Нисек кенә булмаһын, социаль гарантиялар хаҡындағы хәстәрлек барыбер ҙә хеҙмәт хаҡын нисек түләһәләр, шуға риза булған хеҙмәткәрҙең үҙенең елкәһендә ята.**

# ПЕНСИЯ "КОНВЕРТТА" БИРЕЛМӘЙ



Эш хаҡын "конвертта" алыусылар ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ, отпуск иҫәпләүҙәрен, эштән киткәндә түләнгән пособие күләмен, торлаҡ, түләүле белем, медицина һ.б. хеҙмәттәр алғанда һалымдың кире ҡайтарылған өлөшөн тулыһынса ала алмай һәм кредит юллағанда ла мөмкинлектәре сикләнеүен уйлап та ҡарамай.

Ойошмала йәки предприятиела эш хаҡын "конвертта" биреү практикаһын ситтән ҡарап, түбәндәге билдәләр буйынса асыҡларға мөмкин:

- кеше ышанмаҫлыҡ түбән эш хаҡтары, уларҙың уртаса баҙар кимәленә тап килмәүе;
- эш хаҡы фонды менән компанияның килеме араһындағы ҙур айырма;
- хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы тарихын аңлайышһыҙ түбәнәйтеү (элекке эш урынында хеҙмәткәр ҙур эш хаҡы алған булһа);
- эш хаҡы күләме һәм хеҙмәткәрҙең кейенеүе араһындағы айырма.

Эш хаҡын законға ярашлы түләмәү фактын һалым органдары йәки дәүләт хеҙмәт инспекцияһы тикшереүе ваҡытында асыҡларға мөмкин. Бының өсөн хеҙмәткәрҙәрҙән эш биреүсегә ҡарата ялыу сигнал булып торорға мөмкин. Ғәҙәттә, бындай ғаризалар хеҙмәткәр эштән киткән, ауырыған, инвалидлыҡ йәки ҡартлыҡ буйынса пенсияға сыҡҡан ваҡытта килә. Закон буйынса, һалым органына хеҙмәткәр үҙе лә, уның дуҫтары, туғандары һ.б. кешеләр, шул иҫәптән уның хоҡуғын яҡлаусы профсоюз ойошмаһы ла мөрәжәғәт итә ала.

Иң мөһиме - ғаризала күрһәтелгән факттар раҫланһын һәм эш биреүсенең эш хаҡын түләгәндә закон боҙоуға юл ҡуйыуын дәлилләһен. Иң яҡшыһы - дәлилдәрҙе алдан әҙерләп, уларҙы һалым органына мөрәжәғәт менән бергә йәки тикшереү барышы ваҡытында биреү. Дәлил сифатында аудио һәм видеояҙмалар, түләү ведомостары, телефон аша һөйләшеүҙәр, хеҙмәткәрҙәрҙең элекке эш биреүселәр менән хеҙмәт килешеүе, реклама белдереүҙәре, статистика органы мәғлүмәттәре, шулай уҡ башҡа хеҙмәткәрҙәрҙең үҙҙәренең эш хаҡы күләме тураһындағы мәғлүмәттәре тороуы мөмкин.

Әлбиттә, һәр эш биреүсе хеҙмәткәрҙәре алдында үҙенең социаль яуаплылығын тулыһынса аңларға тейеш, әммә хеҙмәткәрҙең үҙенә лә бөгөн конвертта алған эш хаҡы өсөн иртәгә уларға бирәү ҙә өҫтәмә пенсияны конвертта килтереп бирмәсен аңларға кәрәк. "Конверттағы" эш хаҡын алыуҙан тәү сиратта хеҙмәткәр зыян күрә: сөнки Пенсия фондына страховка иғәнәләре эш биреүсе тарафынан предприятиеның эш хаҡын түләү фондынан түләнә, ә хеҙмәткәрҙең эш хаҡынан тотоп ҡалынмай.

Страховка иғәнәләренең нисек түләнеүен Рәсәй Пенсия фондының территориаль органындағы шәхси иҫәп күсермәһен алып йәки www.gosuslugi.ru порталында электрон хеҙмәт аша белергә мөмкин.

## Пенсияға стажың етәме?

**2015 йылдың 1 ғинуарынан "Страховка пенсиялары тураһында" Федераль закон көсөнә инәсәк. Ул граждандарҙың пенсия хоҡуҡтарын формалаштырыуға һәм мотлаҡ пенсия страховкаһы системаһына пенсия иҫәпләүгә яңы тәртип индерә.**

Законға ярашлы, страховка стажын иҫәпләгәндә граждандың эш осоро шәхси (персонифицированный) иҫәп нигеҙендә раҫлана. Был мәғлүмәттәр страховкаланған кешенең шәхси иҫәбендә сағылыш табырға тейеш.

Әлеге ваҡытта Пенсия фонды тарафынан страховкаланған кешеләрҙең шәхси иҫәптәре тикшерелә. Сөнки ошо система ҡулланыла башлағанға тиклем стаждары булып та, улар иҫәпкә алынмаһа, был граждандың буласаҡ пенсияһына йоғонто яһауы мөмкин. Был эш граждандың Мотлаҡ пенсия страховкаһы системаһында хоҡуҡтарын максималь кимәлдә иҫәпкә алыу маҡсатында уҙғарыла. Әлеге ваҡытта республиканың район-ҡалаларындағы 39896 эш биреүсегә, 12002 шәхси эшҡыуарға, 36710 эшһеҙгә 2002 йылдың 1 ғинуарына тиклем алынған пенсия хоҡуҡтарын страховкалау тураһында мәғлүмәт һорап, хаттар ебәрелгән.

Шуға күрә барлыҡ эш биреүселәр Пенсия фондынан 2002 йылға тиклем шәхси иҫәптәрендә стажы тураһында мәғлүмәте булмаған хеҙмәткәрҙәргә СЗВ-К формаһын тапшырырға тейеш. Сөнки киләһе йылдан пенсия балл системаһы буйынса иҫәпләнәсәк һәм бында граждандың барлыҡ пенсия хоҡуҡтары ла иҫәпкә алынырға тейеш. Стаж тураһында мәғлүмәттәрҙең булмауы хеҙмәт пенсияһын билдәләүгә һәм буласаҡ пенсия күләменә йоғонто яһауы мөмкин.

Шундай хаттар алған граждандарға һәм эшҡыуарҙарға йәшәгән урыны буйынса Пенсия фондына паспорт, хеҙмәт кенәгәһе, хәрби билет, аныҡлаусы справкалар һәм стаж тураһында барлыҡ мәғлүмәт туплаған башҡа документтар менән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Белгестәр документтарҙы тикшереп, уларға хоҡуҡи баһа биреп, мәғлүмәттәрҙе махсус формаға тултырырға ярҙам итәсәк.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ПЕНСИЯ АРТА

**Ағымдағы йылдың 1 августынан хаҡлы ялда булып та эшләп йөрөүселәрҙең пенсияһы артты. Был 14 миллион тиреһе рәсәйлегә ҡағыласаҡ.**

Рәсәйҙең Пенсия фондында белдереүҙәренсә, корректировка һеҙәмтәһендә эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсия күләме автоматик рәүештә күтәреләсәк. Өҫтәлмәнең аныҡ суммаһы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Уҙған йылда, мәҫәлән, был категория граждандарҙың пенсияһы, планға ярашлы башҡарылған индексациялауҙан тыш, уртаса 172 һумға күтәрелгән. Төрлө төбәктәрҙә, хаҡлы ялда булыусылар өсөн эш биреүселәр тарафынан күсерелгән страховка иғәнәһе суммаһынан сығып, был һан 122 һумдан 263 һумға тиклем тәшкил иткән.

## ХӘРБИ ЙЫЙЫНҒА ӘҘЕРЛӘН

**Август-октябрь айҙарында илдең бөтә хәрби округтарында ла запастағы хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе йыясаҡтар. Был хаҡта Рәсәйҙең оборона министрлығы хәбәр итә.**

Әҙерлекте төп хәрби һөнәр белгестәре үтәсәк. Улар иҫәбенә бәйләнеш, ракета һәм артиллерия, мотоатыу (мотострелок), шулай уҡ Хәрби-диңгеҙ флотының яр буйы ғәскәрҙәре хеҙмәткәрҙәре, понтон-күпер, тимер юлы һәм инженер подразделениелары белгестәре инә. Запастағы хәрбиҙәр яңы һәм модернизацияланған ҡорал өлгөләре, хәрби һәм махсус техника менән танышасаҡ, улар менән эш итергә, йүнәтергә өйрәнәсәк.

Министрлыҡта белдереүҙәренсә, сборға килгәндәрҙең барыһы ла хәрби званиеһына һәм штаттағы вазифаһына ярашлы аҡсалата түләү һәм командировка аҡсаһы алырға хоҡуҡлы. Шулай уҡ улар аҙыҡ-түлек, кейем һәм бушлай медицина ярҙамы менән тәьмин ителәсәк.

## ҺЫРА РЕКЛАМАЛАНАСАҠ

**Рәсәй ҡануниәте менән Халыҡ-ара футбол федерацияны араһында килеп тыуған төп ҡаршылыҡ ошо көндәрҙә хәл ителгән.**

Төп бағыусылары булып һыра компаниялары торған ФИФА Рәсәй властарына бынан бер нисә йыл элек алкоголде рекламалауҙы тыйыуҙы ҡабаттан ҡарауҙарын һорап, күп тапҡырҙар мөрәжәғәт итә. Сөнки был 2018 йылда Рәсәйҙә футбол буйынса донъя чемпионатын үткәргәндә ФИФА-ның кеҫәһенә һуғыу менән янай. Ахыр килеп, үткән шишәмбе Владимир Путин "рәсми спорт саралары, телеканалдарҙа спорт ярыштарын трансляциялаған ваҡытта, махсус матбуғат сараларында" Рәсәй стадиондарында һыра рекламаһын урынлаштырыуға рөхсәт биреүсе законға ҡул ҡуйҙы.

Әммә донъя чемпионаты тамамланыу менән, йәғни 2019 йылдың 1 ғинуарынан, был тыйыу тағы ла үҙ көсөнә инәсәк.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тамаҡ ауыртһа

1 ҡалаҡ алма һеркәһе һәм бал алырға, 0,5 литр ҡайнатып һыуытылған йылы һыуға ҡушып болғатырға һәм тамаҡты сайҡатырға. Йүткереп торһағыҙ, һалҡын алдырғанда балға балан ҡушып дауа әҙерләргә була. 1 стакан балан емешенә 1 литр ҡайнар һыу ҡойоғоҙ, 8-10 минут ҡайнатырға. Һөҙөргә, 3 ҡалаҡ бал өҫтәргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

### Үксә тибенгеһе (пяточная шпора)

Кем был сир менән яфалана, ултырырға ла, үксәне быймаға ышҡырға. Ауыртһа ла, түҙергә тырышығыҙ. Ҡайһы берҙә сир беренсе тапҡырҙа уҡ юҡҡа сыға.

### Тымау тейһә...

Балғалаҡтың осона ғына элеп тоҙ алырға һәм 0,5 литр ҡайнар һыуға һалып болғатырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр танауға 2-шәр тамсы тамыҙырға.

### Сәстәрҙе тәрбиәләү

❖ Бала тыуғандан һуң, сәстәрем ҡойола башлағас, уларҙы үҙемсә дауалап алдым. Сәстәрҙе йыуғандан һуң һуған, һарымһаҡты иҙеп, уға дегәнәк майы өҫтәп, сәс төбөнә һөртәһең. Полиэтилен кейеп, ярты сәғәт тотаһың һәм йыуаһың.

❖ Еүеш сәстәрҙең төбөнә диңгеҙ тоҙо ышҡып, 15-20 минуттан һуң йыуаһың.

❖ 1 балғалаҡ ҡыҙыл бороҫка 10 балғалаҡ спирт өҫтәп, 6-7 көн төнәтергә. Һөҙөргә һәм ҡайнаған һыу менән болғатып (1:10), аҙнаһына 2-3 тапҡыр төнгөләккә баш тиреһенә һөртөргә.

❖ Дегеттән яһалған шампунь менән сәстәрҙе йыуырға. Был осраҡта сәстәр ныҡ кибә, шуға ла 1 йомортҡа һарыһы, 1-әр балғалаҡ касторка, зәйтүн, дегәнәк майҙары, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Яҡшылап болғатып, сәстәргә һөртөргә. 3 сәғәт торға.

❖ 1 ампула D3 витамины, 2 ҡалаҡ касторка майын ҡушып, баш тиреһенә һөртөргә. 15-20 минут тотҡас, башта йылы, һуңынан һалҡын һыу менән йыуырға.

❖ Ете йыл инде магазиндан шампунь һатып алмайым, сәсемде йомортҡа һарыһы менән йыуам. Эремсек, ҡорот һыуы менән йыуырға ла була.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТЫУЫМ БУЛҒАС, ҮЛЕМ ДӘ БАР

**Халҡыбыҙ йәшәйештең мәңгелек һорауҙарына, шулай уҡ тыуым менән үлемгә лә философик күҙлектән ҡараған. "Үлемдән ҡурҡһаң, донъяла йәшәмә", - тигәндәр, үлем - ул йәндең икенсе бер торошҡа күсеүе, тип ышанғандар. Шуға ла үлем килтергән юғалтыу ни тиклем генә ауыр һәм әрнеүле булмаһын, мәрхүмдең икенсе донъяға күсеүен еңелләштереү маҡсатынан төрлө йолалар башҡарылған.**

Кеше тыуғас та, күпме йәшәйәсәге, күпме ризыҡ ашаясағы уның "Яҙмыш китабы"на яҙылып ҡуя, - тип иҫәпләнгән. "Ашын ашаған, йәшен йәшәгән" тигән әйтем ошо турала һөйләй. Үлем түшәгендә ятыусының хәлен еңеләйтеү маҡсатынан "Ясин" сүрәһе уҡылған, кәрәк булғанда, уның ирендәрен еүеш ҡаурый менән сылатып торғандар, был "шайтан һыу биреп өлгөрмәһен өсөн" эшләнгән. Мосолмандар инаныуы буйынса, үлем алдынан кеше ныҡ сарсай, шуға ла шайтан биргән бер сынаяҡ һыуға иманын һатыуы ла ихтимал. Башҡорттар араһына ислам диненең үтеп инеүенә тиклемге осорҙа мәрхүмде ризыҡ менән тәьмин итеү йолаһы күҙәтелгән. Тоҙ, ярма йәки он һалынған табаҡты уның янына ҡуйып, ул үҙе менән тереләрҙең ризығын, йорттоң ҡотон алып китмәһен, - тигәндәр. Мәрхүмде йорттан алып сыҡҡас, был ризыҡтар өлкән йәштәге бер кешегә бирелгән. Йола буйынса, был ризыҡтан баш тартырға ярамаған.

Ғәҙәттә, мәрхүмде яңғыҙын ҡалдырмағандар, туғандары, күрше-тирәһе уның менән хушлашырға килгән, иң яҡын кешеләре төнөн уның янында ултырып сыҡҡан.

Ислам диненә ярашлы, кеше үлгәндән һуң уның өсө, етеһе, ҡырҡы, йыллығы билдәләнгән. Ҡайһы бер төбәктәрҙә 51 йәки 52 көнө үткәрелгән. Һуңғараҡ, мөмкинлектәренә ҡарап, йыл һайын йылын уҡыта башлағандар, һәр яҙ һайын бар мәрхүмдәргә арнап аят уҡылған. Мәрхүмде алып сыҡҡандан һуң, йорт йыйыштырылған, йыуылған, унда мотлаҡ таба еҫе сығарғандар - майҙа ҡамыр ризыҡтары бешерелгән. Май еҫе йортто яуыз көстәрҙән таҙарта, мәрхүмдең йәнен туйҙыра, тигән ышаныу булған. Шулай уҡ май еҫе уға фәрештәләрҙең һорауҙарына яуап бирергә ярҙам итә, тигәндәр. Ҡайһы бер райондарҙа был йортта өс көн буйына ашарға бешермәйҙәр, әммә таба еҫе сығарыу мотлаҡ һанала. Иҫкә алыу табынына башлыса йәймә, йоҡа, көлсә, ҡоймаҡ, белен бешергәндәр. Дим менән Өршәк буйында йәшәүселәр, шулай уҡ төньяҡ райондар башҡорттары уны 41 (42) йәймә тип атап йөрөтә. Сәйгә ҡамыр ризыҡтары, ожмах емештәре - йөҙөм ҡуйылған. Мулла Ҡөрьәндән махсус аяттар уҡып, барыһы ла мәрхүмдең рухын иҫкә алғас, хәйер таратыла. Йыназа уҡыған муллаға һарыҡ, ҡаҙ йәки тауыҡ, ҡайһы саҡта тана йәки атты гүр саҙаҡаһы итеп бирәләр. Ырымбур башҡорттарында бындай тауыҡты ҡәбер һөйөнсөһө тип йөрөтөләр. Муллаға бүләк ителгән мал фидиә тип атала.

Бер йылдан һуң, мәрхүмдең йәне нәҫелде ҡурсып тороусылар рәтенә баҫа, тигәндәр. Шуға ла үлгән туғандарҙы иҫкә алып, аят әйтеү йолаһы иң изге эштәрҙән һанала. Әрүахтар һәр кесе йома һайын яҡындарының хәлен белергә килә, тигән ышаныуға ярашлы, был көндө аяттар уҡылған, төрлө һый әҙерләнгән.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ӨФӨЛӘРГӘ БАРАМ ӘЛЕ...*

# ҠАБАТ ТЫУҒАНДА ЛА...

## барыбер табип булыр инем

**Стәрлетамаҡ медицина училищеһын ҡыҙыл дипломға тамамлағас, эшкә тыуған районым үҙәге Мораҡҡа ҡайтып, Моҡас медпунктында эшләй башланым. Шулай йылдан ашыу ваҡыт үтеп китте. Әммә күңел төпкөлөндә уҡыуымды дауам итеү теләге һаман тынғы бирмәй, быҫҡып, бына-бына дөрләйем тип ята, тик баш врач документтарымды биреүҙән ҡырҡа баш тартты.**




Ике аҙна отпускым бар ине, шуны алып, Өфөгә сыҡтым да киттем. Мединституттың төп корпусин эҙләп табып килеп ингәйнем, ҡаршыма бер ағай осраны. Уға: "Күгәрсен районынан килдем, документтарымды бирмәнеләр, үҙем менән паспортым ғына бар. Имтихандар тапшырып ҡарарға ине", - тип, хәлемде аңлатып һөйләп бирҙем. Ул: "Ай-һай, өлгөрөрһөңмө икән, бөгөн документтар тапшырыуҙың һуңғы көнө, эш көнө бөтөүгә ике сәғәт ваҡыт ҡалды. Совет майҙанына барып, Һаулыҡ һаҡлау министрлығын эҙләп тап, дипломыңдың күсермәһен алып кил", - тип, саҡ ҡына булһа ла күңелгә ойотҡо һалды. Министрлыҡҡа барып ингәс, унда ла ҡаршыма бер ағай осраны. Мин унан: "Министрҙы нисек табырға була?" - тип һорайым. "Уны нишләтәһең?" - тип көлә. Хәлемде аңлатып һөйләп биргәс: "Һеңлем, һиңә кадрҙар бүлегенә барырға кәрәк, әйҙә, тәүҙә ҡабул итеү бүлмәһенә барып, аныҡла", - тип, ҡабул итеү бүлмәһенә индереп китте. Унда ултырған секретаршаға дипломымдың күсермәһе кәрәклеген аңлатһам, секретарша "Минең эш көнөм бөттө", тип тик тора. Минең бәхеткәме икән, бер бүлмәнән тағы бер ағай килеп сыҡты ла, минең иларҙай булып баҫып торғанымды күрептер инде, хәлемде һораша башланы. "Дипломымдың күсермәһен алырға ине. Документтарымды баш табип бирмәне, минең мединститутҡа имтихан биреп ҡарағым килә", - тием. Ағай секретаршаға боролдо ла: "Зилә, уҡыйым тип торған балаға ниңә ҡаршы киләһең? Табып бир дипломының күсермәһен!" - тине. Секретарша ҡатын менән икәүләп кадрҙар бүлегенә барып, дипломымдың күсермәһен эшләп (ул ваҡытта ксерокстар юҡ, ҡулдан яҙырға кәрәк), мисәт ҡуйҙыртып, йүгерҙем мединститутҡа. Килеп инһәм, документтарҙы ҡабул итеп ултырыусы ҡыҙҙар "Юҡ, ваҡыт үтте, ҡабул итмәйбеҙ", тиҙәр. Тағы теге тәүге осраған ағай ярҙамға килде. Баҡтиһәң, ул ҡабул итеү комиссияһы рәйесе булған икән. "Ошо ҡыҙҙың ғына документтарын ҡабул итегеҙ ҙә", - тигәс, ҡыҙҙар документтарымды алып ҡалдылар.

Елкәнән тау төшкәндәй еңел һулап, тимер юл вокзалына барып, таң атҡансы уяулы-йоҡоло төн үткәрҙем дә, иртәгәһен ҡабат институтҡа килдем. Күп итеп исемлектәр эленгән. Шуларҙы уҡып йөрөйөм. Ҡараһам, береһендә минең дә фамилиям бар, эргәһенә имтихан көнө яҙылған. Баҡтиһәң, шул көндө үк имтихан тапшырырға тейешмен икән. Бер ишек алдында өймәкләшеп йәштәр тора. "Мине үткәрегеҙ, минең ошо бүлмәлә имтихан", тием. "Ә беҙ уйнарға килгән тип уйлайһыңмы?" тип көләләр. Шунан минән "Имтихан ҡағыҙы алдыңмы?" тип белештеләр. Алмағанмын икән. Өйрәтеп, күрһәтеп ебәрҙеләр. Барып, имтихан ҡағыҙын алып, аудиториямды эҙләп киттем. Инеп, билет алдым да, әҙерләнеп тә тормайынса, яуап бирергә ултырҙым. "Әҙерлән", тиҙәр. "Әҙерләнмәй генә яуап бирергә мөмкинме?" тием. "Юҡ, беҙҙә яуаптарығыҙ яҙған ҡағыҙығыҙ ҡалырға тейеш, бар, әҙерлән", - тиҙәр. Өҫтәл артына барып ултырҙым да, тиҙ-тиҙ генә яҙғыслап, комиссия алдына ҡабат барып ултырҙым һәм һөйләй башланым. Тауышымды күтәрә барам, күтәрә барам икән. Имтихан алыусылар, башҡалар әҙерләнеп ултыра, ҡысҡырма, тип тыя. Мин әкрен генә һөйләй башлайым да, тағы ҡысҡырып һөйләүгә күсәм икән. Комиссия ағзалары мине туҡтатып, икенсе һорауға күсергә ҡуша. Тағы әкрен генә һөйләй башлайым да, тауышымды күтәрә барам, күтәрә барам икән. Тағы туҡтаталар. Өс һорауға ла яуап бирҙем. "Бар, бар, башҡаларға ҡамасаулама", - тип сығарып ебәрҙеләр. Сыҡтым да, ҡысҡырып һөйләгәнгә, тыңлап та бөтмәйенсә, бүлдереп ҡыуып сығарҙылар инде, тип эй көйәм. Тынысланып киләйем тип, Ленин урамы буйлап йөрөнөм-йөрөнөм дә, ятаҡҡа киттем. Ашау ҙа, йоҡо ла юҡ. Ятаҡҡа барһам, унда имтихан ҡағыҙын һорайҙар. Минең имтихан ҡағыҙы институтта ҡалғайны бит инде. Киттем ҡабат институтҡа. Барһам, унда фамилиялап ҡысҡырып, баһа ҡуйылған имтихан ҡағыҙҙарын тараталар. Минең дә фамилияны ҡысҡырҙылар. Барып алып ҡараһам... бишле тора! Был имтихан биологиянан ине.

Һуңынан ятаҡҡа урынлаштым, башҡа имтихандарға әҙерләнә башланым. Физиканан, химиянан да бишлегә тапшырҙым, рус теленән иншанан ғына дүртле булды. Имтихандарҙы тапшырып бөтөп, районға ҡайтып киттем. Баш табип, башбаштаҡланып йөрөйһөң, тип асыулана. Артабан эшләп йөрөйөм. Бер ниндәй саҡырыу ҙа юҡ. Башҡалар тик бишлегә генә тапшырғандыр инде, мин инмәгәнмендер инде, тип уйлайым. Мотоциклда йөрөй инем. Бер көндө хат ташыусы ҡысҡырып туҡтатты. Бергә имтихан тапшырған Стәрлетамаҡтағы курсташтарым Илдус, Әхәт, Рәкип, Иван барып белешкәндәр ҙә, "Зачислили. Поздравляем", тип телеграмма һуҡҡандар. Августың һуңғы көндәре. Баш табип ҡәнәғәтһеҙ генә документтарҙы бирҙе.

Шулай итеп, институтта уҡый башланым, бер ыңғай Республика клиник дауаханаһында эшләп тә йөрөнөм. Баш ҡала шулай яуланды. Хәҙер инде, Аллаға шөкөр, 40 йыл кешеләр һаулығы һағында торам. Ҡабаттан тыуып, яңынан һөнәр һайлау мөмкинлеге торһа, барыбер ҙә ауыр, ҡатмарлы, яуаплы, әммә изге һөнәр булған табип һөнәрен һайлар инем...

**Рәфиә БУРАНҒОЛОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

*ШАҢДАУ*

# СӘСӘНЛЕК...

## сәсән вариҫтарының да сифаты



**"Киске Өфө"нөң быйылғы 23-сө һанында донъя күргән "Этнотуризм нигеҙендә... "Урал батыр" бренды булырға тейеш" тип аталған диалогты уҡығас, ундағы фекерҙәрҙе дауам итеп, бер нисә һүҙ әйтмәксе булдым.**

Халҡыбыҙҙың аҫыл ҡомартҡыһы, ғорурланырлыҡ әҫәре - "Урал батыр" эпосын Мөхәмәтша Буранғоловтың Ғәбит Арғынбаевтан яҙып алғаны барыбыҙға ла мәғлүм. Түбәнге Иҙрис ауылында Ғәбит сәсәндең вариҫтары - Арғынбаевтар, Маннаповтар, Ҡаһармановтар, Солтановтар, Миҙәтғәлиндар ғаиләләре йәшәй. Минең атайым - Ҡаһарманов Әбделхәй Зәйнулла улы Ғәбит сәсәнде үҙе күргән кеше булараҡ, уның тураһында:"Бөтөн яҡтан да килгән кеше ине, - тип хәтерләй торғайны. - Йырсы, ҡурайсы, сәсән. Һәр ваҡыт ҙур йыйындарға йөрөттөләр. Бер ваҡыт хатта башҡорт милли кейемдәрен кейҙереп, ҡурайын тоттороп, Парижға алып киттеләр..." Ғәбит сәсән эposты бер тынала (ете мең юл, тип әйтер ине атайым) һөйләр, һөйләгән ваҡытында үҙе шундағы образдарға инеп, ҡул-аяҡтарын хәрәкәтләндереп, бейеп, йырлап, урыны-урыны менән ҡурайын уйнар булған. Ғәбит сәсән тураһындағы күп материалдар Булат ағай Маннаповта һаҡлана.

Ошо сәсәнлек сифаты ауылымдың олоһона ла, кесеһенә лә хас. Боронғо кәсептәр ҙә онотолмаған: балаҫ һуғалар, кейеҙ баҫалар, шәл һуғалар, аш-һыуҙың иң бо-

*✓ Мине тотоп сырмарға килеүҙәрен шәйләгәс, янымдағы ике урыҫты йыға һуҡтым да, ҡаянан Яйыҡҡа һикерҙем. Түбәнгә осоп барғанда уң үксәнең яныуын ғына тойҙом. Бер аҙ йөҙөп, бер ҡумырыҡ аҫтына инеп, үксәне ус менән ҡыҫып яттым.*



ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП

**1940 йылдың март аҙағы. Йылы сыуаҡ көн. Ауылдың ололары урам башында урынлашҡан колхоз келәте янына йыйылған. Атайым менән беҙ ҙә уларға барып ҡушылдыҡ. Бер аҙҙан күктә ал ҡыҙыл, зәңгәрһыу ҡыҙыл уттар күренә башланы. Нәҡ көслө ямғыр яуғандағы кеүек ялтлап-ялтлап китә. Үҙе тик төньяҡ-көнбайышта Сейәбар тауы офоғонда ғына. Шул ваҡыт ҡарттарҙың иң олоһо Әҙһәм бабай: "Уй, Алла! Был "ҡан яуыуы" бит. Ҡайҙалыр йыраҡта ҡан ҡойош бара, күрәһең", - тине. Ә бригадир Ситдыҡ еҙнә: "Эйе, нәҡ шул яҡта фин һуғышы бара бит", - тип ҡеүәтләне. Әҙһәм бабай: "Эй, был донъя, бер ҙә ҡан ҡойошһоҙ, ыҙғыш-талашһыҙ, һуғыш-ҡырылышһыҙ тормай шул. Ана, беҙҙең ырыу башы Ҡотсәләм олатай ҙа бит 1736-1740 йылдарҙа Ҡараһаҡал ихтилалында ҡатнашыусы Бәпәнәй Төрөпбирҙин полкында күҙәтеүсе булып, яралар алып, саҡ әйләнеп ҡайтҡан кеше булған..."- тип, бөтәбеҙҙе лә ауыҙына ҡаратты. "Шунан, шунан? Уның тураһында һөйлә әле, олатай", - тип төпсөнә башлағас, белмәгәндәр белеп ҡалһын, тиеп, һөйләп алып китте.**

# ҠАРТ ОЛАТАЙЫБЫҘ...

## Бәпәнәй полкында һуғышҡан

- Был хәл 1738 йылдың йәйендә Урал тауының көнсығыш ауылында Миндәк йылғаһы башындағы Сатра яланы (хәҙер уны Шантара Ҡарағайлы тип йөрөтәләр) йәйләүендә була. Бер көн һары таңда Дауыт ҡарттың әбейе тәһәрәт алырға тип аласыҡтан сыға. Шул саҡ яҡында ғына, йыуан ҡарт ҡайын артынан бер кеше башының берсә күренеп, берсә йәшенеүен шәйләп ҡала. Әбей ҡото осоп, тәһәрәтен дә бөтөрмәй, аяҡтунын күтәреп тота ла, аласыҡҡа инеп китә. Күп тә үтмәй, ҡулына суҡмар тотҡан Дауыт килеп сыға һәм: "Илһеңме, яуһыңмы, кем бар унда?"- тип оран һала. Шул саҡ ҡайын артынан: "Был мин, Дауыт ағай, Ҡотсәләм ҡустың... Тик мин инәнән тыума яланғасмын. Берәй аяҡтунмы, күлдәкме, еләнме килтер әле", - тип башын ғына күрһәтә. Ҡотсәләмгә бер аяҡтун, йоҡа сәкмән килтереп кейҙерәләр ҙә, аласыҡҡа йүнәләләр. Был саҡта ишек алдына әбейҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар, бала-сағалар йыйылып та өлгөргән була. Сәй эсеп, ул-был иткәс, йәйләүҙәге бөтә халыҡ йыйыла. Ошо йыйында Ҡотсәләм олатай үҙе менән ниҙәр булғанын бәйнә-бәйнә һөйләп бирә: "Беҙ бынан сығып киткәс тә Көркәк, Ҡырҡты, Ирәндек тауҙары буйындағы ҡышлауҙарға һуғыла-һуғыла, илен-халҡын урыҫтарҙың ҡыйырһытыуынан һаҡлап ҡалыу өсөн көрәшкә әҙер ир-егеттәрҙе үҙебеҙҙең төркөмгә ҡуша-ҡуша, ниһайәт, Бәпәнәй Төрөпбирҙиндең ғәскәрен барып таптыҡ. Бәпәнәй тәүге күрешеүҙән үк мине төҫмөрләп: "Һин әллә Теләүҙәрҙәнме?" - тип һораны. Мин уға: "Теләү үк түгел, әммә уларға сиктәш йәшәүсе Күбәләктәрҙән, Торһай аҫтындағы Оҙонгүл күле буйы башҡорттарынан", - тип яуапланым.



Артабан бер нисә бәрелештә лә ҡатнаштым. Бәпәнәй менән Ҡараһаҡал араһындағы бәйләнеш элемтәсеһе булып йөрөнөм. Ә аҙаҡ, сослоғом, абайлығым, яҡшы хәтерле булыуым һәм тәүәккәллегем арҡаһында күҙәтеүсе булып йөрөнөм. Аҙаҡ, ишетә беләһегеҙҙер, Яйыҡ буйындағы Аҡтүбәлә урынлашып, батша ғәскәрен ҡаршы алырға йыйындыҡ. Мине тағы ике иптәш менән ҡаршы яҡ ғәскәрҙәре тураһында мәғлүмәт алып ҡайтыу өсөн Яйыҡтың үренә ебәрҙеләр. Батша ғәскәрҙәре Олағор менән Оҙонғор тау һырттарының башы тирәһендә Яйыҡтың һул яҡ яры буйында Талҡаланан (Верхнеуральск) Себергә илтеүсе оло юл буйында туҡталған булған (тимәк, хәҙерге Науруҙ менән Ташҡая ауылдары араһындағы Ташлы яр тирәһе булып сыға). Ошо түбәгә етәрәк, унда аттарҙы, уҡ-һаҙаҡтарҙы һәм берәүебеҙҙе ҡалдырҙыҡ. Ә икебеҙ түбәнең ике яҡ ауышына йүнәлдек. Ҡая таштар араһында уңайлыраҡ урынды табып, оҙаҡ та ятманым, аңғармаҫтан мине эләктереп тә алдылар, сырмап алып та киттеләр. Убаның төньяҡ ауышына килтерҙеләр. Ҡараһам, ике иптәшем дә бәйле ултыра. Икеһе лә туҡмалған, береһе ҡан ҡоҫа. Китте һорауҙар-түпәләүҙәр. Бер аҙҙан һуң беҙҙең икебеҙҙе яр башына килтереп, инәнән тыума сисендерҙеләр. Ә ярға яҡын ғына урында "шеш" әҙер ине инде ("шеш" - ул ҡаҡ ағастан яһала. Ике аршын оҙонлоғондағы орсоҡто уртаһындағы ҡаҡкыс бүлкәсенә тиклем ергә ҡағалар. Унан язаланыусыны арты менән шул шешкә ултырталар. Уның юғары осо кәүҙәнең эсенән үтеп, баш яғынан килеп сығырға тейеш була). Мине тотоп сырмарға килеүҙәрен шәйләгәс, янымдағы ике урыҫты йыға һуҡтым да, ҡаянан Яйыҡҡа һикерҙем. Түбәнгә осоп барғанда уң үксәнең яныуын ғына тойҙом. Һыу аҫтында йөҙөү минең өсөн ауыр түгел. Бер аҙ йөҙөп, бер ҡумырыҡ аҫтына инеп, үксәне ус менән ҡыҫып яттым. Бер аҙҙан: "Ҡотсәләм, сыҡ! Улар беҙҙе ҡурҡытыу өсөн генә сисендергәндәр икән. Сыҡ!"- тигән оранды ишеттем. Тағы бер аҙҙан: "Инәй! Уй Алла!"- тигән әсе тауыш ишетелде лә, тауыштар тынды. Ошо ҡумырыҡ аҫтында төн уртаһына ҡәҙәр яттым. Унан, көс-хәл менән йөҙөп, Яйыҡтың уң яҡ ярына үҙебеҙҙең яҡҡа сыҡтым. Көсөк ҡышлауҙары яғына ынтылдым. Ләкин көс юҡ, һыу үксәнән ҡанды күп һурған. Унан ҡайҙа атлап, ҡайҙа үрмәләп, ҡайҙа шыуышып, емеш-еләк, йыуа, бетлекәй, балтырғандарҙы һоғона-һоғона бына дүрт тәүлек тигәндә һеҙгә килеп еттем, Аллаға шөкөр",- тип һүҙен тамамлаған Ҡотсәләм олатай. Ә Ҡотсәләм олатайҙың ҡырҙа йөрөүе арауығында бына ошо Оҙонгүл ауылы барлыҡҡа килгән дә инде. Уға Көсөкбай, Әмин-Тәзәк, Әсәт, Дауыт, Йосоп олатайҙар нигеҙ һалған. Уларға Ҡотсәләм олатай, һуңыраҡ Әптел, Һары икмәктәрҙең Ғиззәтуллаһы һәм Абҙаҡ яғынан Ишемдәр килеп ҡушылып, төрлө баҫҡынсыларға ҡаршы тора алырлыҡ ауылға әүерелгән. Бер йыл үткәс, Ҡотсәләм олатай Теләүҙәр ырыуы Тағараҡ (Алтыаяҡ) ауылы ҡыҙына өйләнә. Шулай итеп, беҙҙең Ҡотсәләмдәр ырыуы сылбыры башланып китә, - тип һүҙен бөтөрҙө Әҙһәм бабай.

Бөгөн Оҙонгүл ауылында йәшәүселәрҙең күпселеген Ҡотсәләмдәр ырыуы нәҫелдәре тәшкил итә. Шулай уҡ Һары икмәктәр, Әптелдәр, Ишемдәр, Дауыттар ырыуы нәҫелдәре йәшәп ята. Ошондай матур тарихтарҙы үҙебеҙ менән алып китеп, быуындар бәйләнеше өҙөлөүгә сәбәп булмайыҡ, уларҙы балаларыбыҙға һөйләй йөрөйөк, тип әйтергә теләгәндән яҙҙым был хәтирәне.

**Ишмөхәмәт РАМАҘАНОВ.**
**Учалы районы Оҙонгүл ауылы.**

---

ронғо төрҙәрен әҙерләй беләләр, ир-ат ат еккеһе кәрәк-яраҡтары, арба-сана эшләп, ағас ҡырҡып, бура бурап өй һала, карьерҙан кирбес кеүек шыма таш сығаралар, эзбиз яндыралар, кирбес һуғалар һ.б. Ошондай һөнәр эйәләре йәшәгән Түбәнге Иҙрис ауылы Темәстән 8 километр алыҫлыҡта, йәмле Һаҡмар буйында ултыра. Сәсәнебеҙҙең тыуған ауылының "Урал батыр" билбауына" индерелеүе өсөн бөтөн нигеҙ бар. Ә күрше генә Муллаҡай ауылында билдәле дин әһеле, әүлиә, заманында ҙур мәҙрәсә тотҡан Ғабдулла Сәиди йәшәгән. Ошо ике билдәле шәхес Урал батыр вариҫтары түгелме ни? Әлбиттә, улар Баймаҡ еренең данын арттырыусы, брендҡа бөтөн яҡтан лайыҡлы шәхестәр. Шулай уҡ Ғәбит сәсәндең тыуған ауылында йорт-музей төҙөү ҙә бик урынлы булыр ине.

**Зифа ҒҮМӘРОВА.**
**Баймаҡ районы Таулыҡай ауылы.**

---

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Башҡорт ауылдарының күпселеге ошо ауылдарға нигеҙ һалған ҡарттарҙың исеме менән атала. Һәр ауыл уртаһында тиерлек мәсет була, ә ҙур ауылдарҙа хатта ике-өс мәсет бар. Был бина ябай башҡорт өйө менән сағыштырғанда архитектура йәһәтенән камилыраҡ. Тышҡы күренеше һәм планы буйынса күпселек мәсеттәр бер-береһенә оҡшаш. Ул бейек биш стеналы йорт. Төньяҡта күтәрмәһе бар, көньяҡта - миһраб. Күтәрмә эргәһендә йәки ҡабырға яҡта ахшамлыҡ эшләнә. Ҡыйыҡ өҫтөнән һәр саҡ манара күтәрелә. Уның тәғәйенләнеше лә ахшамлыҡ кеүек үк. Эске яҡтан мәсет ике өлөштән тора. Башмаҡ бүлмәһендә мәсеткә килеүселәр аяҡ кейемдәрен сисеп ҡалдыра; сөннәт бүлмәһе намаҙ уҡыу өсөн тәғәйенләнә. Миһраб алдында урынлашҡан өсөнсө фарыз бүлмәһе лә була. Мәсеттең һуңғы өлөшөндә миһрабтан уң яҡта мөнбәр эшләнә һәм мулла унда баҫҡыс буйлап менеп, вәғәз һөйләй. Мәсеттең эсе ябай ғына итеп йыһазландырыла. Стеналар бер нәмә менән дә ҡапланмай, уларға бары тик Ҡөрьәндән өҙөктәр элenә; иҙәнгә кейеҙ һәм балаҫ түшәлә.

## Йөрөү ысулы һәм саралары

Башҡорттарҙың бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөү ысулдары һәм саралары уларҙың йәшәгән урынына һәм йәшәү рәүешенә бәйле. Элек Башҡортостандың өҫтән ике өлөшө таулы һәм урман менән ҡапланған, бары тик өҫтән бер өлөшө генә арба йөрөрлөк була. Йәйгеһен башҡорттар - атта һыбай, ҡышын саңғыла йөрөгән.

Башҡорттарҙың саңғыһы ике төрлө: ябай ағас саңғылар - ҡалтағай һәм һунар саңғылары. Һуңғылары ике метр оҙонлоҡта һәм ат тояғынан туналған тире, бик һирәк мышы тиреһе менән көпләнә. Аяҡ саңғыға ҡайыш менән бәйләнгән урында, аяҡ аҫтына ҡар тулмаһын өсөн туҙ менән ҡаплана. Саңғы эшләгәндә, еңел, һығылмалы һәм ныҡлы булараҡ, муйыл ағасы ҡулланылған. Бик һирәк кенә ҡарағай файҙаланылған.

Юлһыҙ Башҡортостанда һыбай йөрөү мөһим роль уйнаған. Йүгән ғәҙәттә ҡайыштан яһалған. Ауыҙлыҡ тимерҙән эшләнеп, тышҡы ҙур ҡулсаларға кейҙерелеп ҡуйылған. Остары ауыҙлыҡтың ҡулсаларына бәйләнгән теҙген ҡайыштан йәки ат ялынан үрелә. Ауыҙлыҡтың һул ҡулсаһына шулай уҡ ат ялынан үрелгән биш метр оҙонлоҡтағы сылбыр бәйләнә.



Борон башҡорттарҙың йүгәнендә теҙген өсөн ҡулсалы, көмөш ҡаш менән биҙәлгән, S формаһындағы боронғо яҙыуҙарҙы хәтерләткән тимер ауыҙлыҡ булған (һүрәт).

Башҡорттарҙың эйәре үҙенсәлеклерәк. Нигеҙе ағастан эшләнгән һәм йомшаҡ яҫтыҡлы, өҙәңгеле, ҡойошҡан һәм күмелдерек ҡайышлы эйәр азиат көтөүселәрендә беҙҙең эраның V быуаттарында барлыҡҡа килгән. VI-VII быуаттарҙа бындай төр эйәр ныҡлы урын алған. Нигеҙе ағастан булмаған һәм өҙәңгеһеҙ эйәр көнсығыш Европа һәм Азияның йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән ҡәбиләләрендә бынан мең йылға алдараҡ билдәле була. Ҡайһы бер деталдәрҙе иҫәпкә алмағанда, башҡорттарҙың эйәре боронғо эйәрҙән һәм замансаларынан әллә ни айырылмай.

✓ *Радикаль секталарҙа йәштәрҙең донъяны үҙгәртергә, тигән "изге" маҡсат менән үҙенә ылыҡтыралар. Был дин түгел. Шөкөр, аҡыллы, тәрән фекер йөрөткән егеттәр унда оҙаҡҡа туҡталманы, киттеләр.*



# ИСЛАМ

## һәр кем үҙ

**Динебеҙгә йөҙ бороусылар арта бара, шөкөр. Ләкин ошо ыңғай күренештәр йәнәшендә динебеҙҙе үҙ маҡсатында ҡулланырға тырышыусы кешеләр, төркөмдәр ҙә күбәйҙе. Уларҙың "эшмәкәрлеге" арҡаһында ҡайһы берәүҙәрҙә ислам диненә ҡарата кире ҡараш, күрә алмаусанлыҡ барлыҡҡа килде. Бөгөнгө һөйләшеүебеҙ ислам диненә, кешеләргә ҡурҡыныс менән янаған секталар, радикаль ағымдар хаҡында буласаҡ. Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының йәштәр бүлеге етәксеһе, мөфтөйҙөң беренсе урынбаҫары Айнур АРЫҪЛАНОВ һәм тележурналист Морат ЛОҠМАНОВ ошо теманы асыуҙа ярҙам итәсәк.**

**Иғлан ителгән темаға төшөр алдынан түбәндәге һорауға яуап бирһәгеҙ ине. Дин хаҡында ғилеме булмағандарға ҡыҫҡа ғына итеп ислам дине хаҡында нисек аңлатыр инегеҙ?**

**М. Лоҡманов:** Бер нисә йыл элек Күмертау ҡалаһында үткән йәштәр форумында ҡатнаштым. Сығыш яһағанда студенттар миңә: "Ислам дине нимә ул?"- тигән һорау бирҙеләр. Студенттар араһында динде аңлағандары, уны белгәндәре күп түгел, башлыса урыҫ милләтле, йә русса һөйләшкән башҡа милләт кешеләре ине. Мин уларҙың һорауҙарына: "Ҡатыным минең турала яҡшы фекерҙә, ирем, тип ихтирам итеп тора. Ата-әсәйем, балам, тип ярата, минең менән ғорурлана. Балаларым, иң яҡшы атай, ти. Эш урынымда ҡәҙерләп торалар, яҡшы белгес, тип беләләр", - тип яуап бирҙем. Был һүҙҙәрҙе маҡтаныу өсөн түгел, ә ислам төшөнсәһен аңлатыу өсөн әйттем. Ошо фекерҙе яңғыраттым да: "Ошо яҡшы сифаттарға эйә булыусы һәм эшендә алдынғы кеше - ул мосолман. Мосолман - әхлағы, әҙәбе, тәртибе менән өлгө күрһәткән кеше, Аллаһтың күрһәткән юлында хеҙмәт итеүсе, уның яратҡан бәндәһе ул. Ислам дине сағылышы шунда. Ә инде ошо кимәлгә еткерә торған әйберҙәр - Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡандарын үтәү. Ана шул Аллаһтың ҡушҡандары кешене камиллаштыра, намаҙ бер яғын тәрбиәләһә, ураҙа икенсе яғын үҫтерә", - тинем.

**А. Арыҫланов:** Исламды бер һүҙ менән генә "хикмәт", тип әйтер инем. Ислам - ул Аллаһы Тәғәлә тарафынан беҙгә бирелгән иң юғары бүләк. Мәҫәлән, минең атайым баҡсасы. Баҡсаһының бер урынында -сөгөлдәр, икенсе урынында - сейәләр, алма ағастары, өсөнсө урында йәшелсә-емештәр үҫеп ултыра. Мин дә исламды баҡса кеүек күрәм. Ислам һәр кеше алдында ҙур бер баҡса кеүек асыла, тик һәр кем уны үҙенең асылына ярашлы ҡабул итә. Кемдер исламды спорт, сәләмәт тормош итеп күрә. Кемдер унда ғилем сығанағына юлыға. Йәғни, һәр кем ислам баҡсаһында үҙ емешен таба.

**М. Лоҡманов:** Бер кеше аҡыл эйәһенә килә лә: "Бына һин миңә ислам тураһында бар нәмәне аңлатып бир әле. Бәлки, мин дә уны яратырмын", - тип мөрәжәғәт итә. Аҡыл эйәһе уға: "Һин минән йорт тураһында һорайһың. Тыштан ҡарап, ошо йорттоң бөтә нескәлектәрен һөйләп биреүҙе үтенәһең. Ләкин быны ошо йортҡа ингәс кенә эшләп була. Тыштан ғына ҡарап, йорттоң эске торошо хаҡында фекер йөрөтөү мөмкин түгел", - тип яуап бирә. Шуға күрә, тыштан ҡарап, ислам хаҡында күпме генә һөйләһәң дә, уны аңлап, аңлатып булмай, дин эсенә инеп, уның талаптарының ләззәтен татығас ҡына, исламды аңлайһың.

**Кеше был донъяға таҙа, саф булып тыуа. Уның артабанғы яҙмышы, күңел паклығы ғаиләләге, йәмғиәттәге тәрбиәһенә бәйле. Кемдәрҙер үҙ булмышын Аллаһ ғәмәлендәгесә килеш һаҡлап ҡала, икенселәр Аллаһ ғәмәлдәренән бөтөнләй йыраҡлаша. Әммә ләкин Аллаһты танығандарҙың да һикәлтәле юлдар үтеп, секталар, аңлайышһыҙ ағымдарға юлығыу күренештәре бар...**





**М. Лоҡманов:** Эйе, кеше аҡ ҡағыҙ шикелле таҙа күңел менән донъяға килә. Хаталарыбыҙ, гонаһтарыбыҙ ана шул аҡ ҡағыҙ битенә ҡара ҡәләм менән яҙылған тап булып ята. Таптар артҡан һайын, ҡағыҙ битендә аҡ урын да ҡалмай, йөрәгебеҙҙе ҡара таптар ялмап ала. Күңел күҙе һуҡырая, ҡәлбебеҙ таш булып ҡата. Ләкин ошо хәлдә лә йөрәк барыбер Аллаһҡа ынтыла, уны эҙләй. Сөнки әлмисаҡта уҡ, әле яралған ваҡытында ғына әле, һәр бер йән Раббыһы менән осраша. Эйе, хәҙер ул төптән, тәрәндән аңлап Аллаһҡа ынтыла. Был ашҡыныу рус телендә "священное томление души" тип атала. Был - йөрәктең Аллаһты эҙләүе. Һәр кешенең йәне үҙенең Раббыһын эҙләй, һәр бер кешелә лә ундай уҡталыу була. Тик берәүҙәрҙә ул тойғо өҫтә ята, икенселәрҙә төптә йәшеренгән була. Тойғолары өҫтәрәк ятҡан кешеләр, мөмкинлек тыуғас та, Раббыһына юлды эҙләй башланы. Тик хаҡ юлға әйҙәй ала торған дини белемле кешеләребеҙ әҙ булыу сәбәпле, кеше ҡайҙа, нимә күреп ҡалды, шуны Аллаһҡа илтә торған юл икән тип ҡабул итте. Бына шул арҡала килеп сыҡты инде ҡайһы берәүҙәрҙең яңылыш юлға төшөүе.

**А. Арыҫланов:** Эйе, дингә ҡайтҡан кешеләрҙең бик күптәре ваххабилыҡ аша үтте, ләкин күптәре уның хаталы икәнен ваҡытында аңлап ҡалды. Үгеҙ йәки ишәк кеүек арҡыры кешеләр иһә, үҙ урындарын ошо радикаль ағымдарҙа тапты, был кешеләр алма, сейәләрҙе хуш күрмәйенсә, әсе йәшелсә-емештәрҙе эҙләне, шулар менән туҡланды. Йәш кешегә нимәгәлер ҡаршы булыу оҡшай бит инде. Һәр йәмғиәттә һин килешмәгән күренештәр була, шул күренештәргә ҡаршы һүҙ һөйләүҙе әләм итеп күтәреп, баҫым яһап, янына байтаҡ фекерҙәштәр туплап була. Радикаль секталарҙа йәштәрҙең ошо тойғоһо менән оҫта файҙаланалар, донъяны үҙгәртергә, тигән "изге" маҡсат менән үҙенә ылыҡтыралар. Был дин түгел. Шөкөр, аҡыллы, тәрән фекер йөрөткән егеттәр унда оҙаҡҡа туҡталманы, киттеләр.

*Дингә килеү юлдары төрлө. Ҡайһы бер кешеләр тормоштарында ғәҙелһеҙлек кисергәндән һуң, берҙән-бер ғәҙел юл, тип, дингә килә. Ундайҙар, ғәҙәттә, судта ғәҙел хөкөм сығармайҙар, түрәләр йүнле түгел, йәмғиәткә беҙҙең кеүек кешеләр кәрәкмәй, тигәнерәк үпкәләү, асыу менән солғанған була. Күңелдәре агрессия, нәфрәт менән тулы булһа ла, үҙҙәрен Аллаһ юлындабыҙ, тип иҫәпләйҙәр. Хәҡиҡәткә, Аллаһ юлына мөхәббәт, нур аша ғына килеп була, ә нәфрәт менән тулы кеше Аллаһ юлында түгел әле. Эйе, бәлки, ул киләсәктә изге күңелле кешеләрҙең ихлас мөғәмәләһе йоғонтоһонда үҙенә бер бәрәкәт, нур алып, дөрөҫ юлға баҫыр, юҡ икән, тимәк, ул үҙенең нәфрәтендә тонсоғасаҡ. Үкенескә ҡаршы, ошоно көҫәгәндәр ҙә бар.*

**М. Лоҡманов:** Дингә килеү юлдары төрлө. Ҡайһы бер кешеләр һаулығын, малын, бөтә нәмәһен юғалтҡандан, оло һынауҙар үткәндән һуң динде ҡабул итә. Икенселәр бала сағында ғаиләһендә күргән ислам тәрбиәһен иҫенә төшөрөп, өләсәй-олатайҙар юлын дауам итеү теләгенән дин юлын һайлай. Өсөнсөләр иһә тормоштарында ғәҙелһеҙлек кисергәндән һуң, берҙән-бер ғәҙел юл, тип, дингә килә. Ундайҙар, ғәҙәттә, судта ғәҙел хөкөм сығармайҙар, түрәләр йүнле түгел, йәмғиәткә беҙҙең кеүек кешеләр кәрәкмәй, тигәнерәк үпкәләү, асыу менән солғанған була. Улар дин юлына баҫҡас та, үҙҙәренең баяғы асыуын онота алмай, исламда ғына, ошо мәсеттә, ошо төркөмдә генә ғәҙеллек хөкөм һөрә, тигән ҡараш менән йәшәй башлай. "Әһә, теге төркөмдәгеләр икенсе төрлө фекер йөрөтә, улар түрәләргә яраҡлашҡандар, тимәк, улар беҙҙең дошмандарыбыҙ", ти улар. Күңелдәре агрессия, нәфрәт менән тулы булһа ла, үҙҙәрен Аллаһ юлындабыҙ, тип иҫәпләйҙәр. Хәҡиҡәткә, Аллаһ юлына мөхәббәт, нур аша ғына килеп була, ә нәфрәт менән тулы кеше Аллаһ юлында түгел әле. Эйе, бәлки, ул киләсәктә изге күңелле кешеләрҙең ихлас мөғәмәләһе йоғонтоһонда үҙенә бер бәрәкәт, нур алып, дөрөҫ юлға баҫыр, юҡ икән, тимәк, ул үҙенең нәфрәтендә тонсоғасаҡ. Үкенескә ҡаршы, ошоно көҫәгәндәр ҙә бар.

**А. Арыҫланов:** Бындай әҙәмдәр һәр ваҡыт системанан, мөфтиәттән, айырым кешеләрҙән хата эҙләй. Ә бит ихлас күңелле мосолман иң тәүҙә кешелә яҡшылыҡ эҙләй. Шул яҡшылыҡты киңәйтергә тырыша...

**Радикаль ағымға эләккән егеттәр, ҡыҙҙарға ҡул һелтәп ҡуйып булмай бит инде. Улар араһында аңлатыу эше нисек алып барылырға тейеш? Ғөмүмән, радикаль ислам ҡурҡынысы беҙҙең төбәк өсөн дә актуаль проблемамы?**

**А. Арыҫланов:** Диниә назаратына эшкә килгәс тә, әлеге проблеманы рәсми рәүештә беренселәрҙән булып мин күтәрҙем. Быға тиклем был хаҡта һөйләмәҫкә тырышалар ине. Бөгөн дә әйтәм: ваххабилыҡ бар, хизбут-тахрир бар. Егеттәребеҙ төркөмләп-төркөмләп Сүриәгә һуғышҡа китә. Биш йәш кеше дингә аяҡ баҫа икән, уларҙың өсөһө ваххабилыҡҡа юлыға.

**М. Лоҡманов:** Был хәл ваххабилыҡтың шул тиклем көслө булыуынан түгел, ә кешенең күңеле ниндәйҙер хәрәкәткә әүәҫ булыуынан килеп сыға. Ошо әүәҫлек менән насар ҡарашлы кешеләр файҙалана. Динде төптәнерәк өйрәнгән, уның матурлығын күргән кеше бер ҡасан да ул юлға баҫмаясаҡ.

Дин юлына саҡ аяҡ баҫыусыларға мин ваххабиҙар янына бөтөнләй яҡынламаҫҡа, уларҙың һүҙҙәрен тыңламаҫҡа кәңәш итер инем. Ул йоғошло ауырыу кеүек. Йәш кеше улар араһына инеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡала. Ваххабиҙар ҡайһы бер хәҙис-аяттарҙы үҙҙәренсә аңлатып, оҫта итеп үҙ мәнфәғәттәрендә файҙалана, ғилемле булып күренеп, кешеләрҙе үҙҙәренә ауҙарырға тырыша. Ошо йәһәттән йәштәргә, ундай кешеләр менән аралашмаҫҡа, улар янына бармаҫҡа, ундай йәмғиәткә инмәҫкә кәңәш бирәм. Улар менән дини бәхәстәр алып барыу иһә - ғалимдар эше.

**А. Арыҫланов:** Әбүғалисина: "Һәр бер ауырыуҙы һүҙ менән дауалап була. Әгәр һүҙ менән дауалап булмаһа, үлән менән дауалап була. Үлән менән дә ауырыу дауаланмаһа, уны бысаҡ менән генә дауалап буласаҡ", - тигән. Әлбиттә, ундай кешеләр араһында аңлатыу эше алып барырға кәрәк. Был беҙҙең имамдарҙың ғына түгел, ә матбуғат баҫмаларының, телевидениеның да бурысы. Был һүҙ менән дауалау була инде. Ҡайһы ваҡытта "үлән менән", йәғни махсус саралар, лекциялар үткәреп "дауалау" зарурлығы тыуа. Ә инде "бысаҡ" функцияһын дәүләттең махсус хеҙмәттәре үҙ өҫтөнә аласаҡ.

**М. Лоҡманов:** Бында имамдарҙы ғәйепләргә ярамай, улар һөслөтә, тип әйтеү ҙә дөрөҫ түгел. Ниндәй генә илдә булмаһын, Рәсәйҙәме, ғәрәп илдәрендәме, радикаллашыу айырым бер сикте үтте икән, был мәсьәлә менән махсус хеҙмәттәр шөғөлләнә. Мөфтиәттәр ҡушҡаны өсөн түгел, дәүләттең именлеге өсөн эшләнә был. Беҙ хәлде ана шул сиккә еткермәҫкә тырышабыҙ, ҡалғаны беҙҙең ҡулда түгел.

***✓ Дин өлкәһендә беҙҙең милли кадрҙар етешмәй, Өфөлә башҡорт телендә вәғәз алып барылған бер генә мәсетебеҙ ҙә юҡ. Ә бит дәғүәттең кешенең тыуған телендә алып барылыуы - сөннәт.***

**А. Арыҫланов:** Беҙ ошо дәүләттең эсендә йәшәйбеҙ, уның үҙ закондары бар. Ул закондарҙың сигенә сыҡтың икән, дәүләт муллаларҙың, журналистарҙың һүҙен генә тынлап тормаясаҡ. Үҙ именлеген һаҡлар өсөн бар көсөн һаласаҡ. "Аллаһ ризалығы өсөн", тип, вокзалды шартлатырға китеп барыусыны дәүләт юҡ итәсәк.

Рәсәйҙә мосолмандар ғына йәшәмәй, христиандар ҙа, йәһүдтәр ҙә, Аллаһҡа бөтөнләй ышанмағандар ҙа бар. Бәйғәмбәребеҙ тормошона күҙ һалһаҡ, шундай ваҡиға була. Ул мөшриктәр менән килешеү төҙөй, "Худәйбийә килешеүе" исеме аҫтында беләбеҙ уны. Тәү ҡарашҡа, был килешеү буйынса мосолмандарҙың хоҡуҡтары үтә лә сикле була. Ләкин, нисек кенә булмаһын, мосолмандар уны боҙмай. Кем уны боҙа, ул монафиҡлыҡтың бер баҫҡысына күсә. Шуның кеүек үк, дәүләттең лһә, был ауыр эҙемтәләргә килтереүе мөмкин. **Шуның өсөн мәҙрәсәләребеҙ ҙә ниндәйҙер контроль аҫтында булырға тейештер бит инде?**

**М. Лоҡманов:** Радикаль ислам емергес көс, шуға ла уға ваҡытында дөрөҫ диагноз ҡуйырға өйрәнер кәрәк. Быны әле дин өлкәһендә лә йәш ғалимдарыбыҙ барлыҡҡа килде. Тап улар әле эшләп килгән мәҙрәсәләребеҙгә ревизия үткәрергә тейештәр, тип уйлайым. Сөнки ҡайһы бер дини белем биреү йорттары ысынлап та һорауҙар тыуҙыра. Эйе, уларҙа матур итеп Ҡөрьәнде, ғәрәп телен өйрәтәләр. Ләкин өйрәтелгән ғилем хәнәфи мәҙхәбенә, милли асылыбыҙға ҡаршы килмәйме? Әгәр ҙә ҡаршы килә икән, хатаны төҙәтергә саҡырырға кәрәк. Әгәр ҙә был мәҙрәсәләгеләр хатаны төҙәтергә теләмәй икән, ул саҡта мәҙрәсәне ябып, үҙгәртеп, эште өр-яңынан башларға тура киләсәк.

**А. Арыҫланов:** Диниә назараты киләсәктә уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса комиссия ойошторасаҡ. Абруйлы имамдар, ғалимдар, дәүләт эшмәкәрҙәре, шулай уҡ РФ Үҙәк Диниә назараты, Рәсәй Ислам университеты вәкилдәре инәсәк был комиссияға. Комиссия мәктәпкә тиклемге (мосолман балалар баҡсалары өсөн), йәкшәмбе мәктәптәре һәм юғары уҡыу йорттары өсөн ислам диненең беҙҙең ерлек өсөн традицион булған хәнәфи мәҙхәбенә нигеҙләнеп, берҙәм уҡытыу программаһы төҙөйәсәк.

Әлеге мәлдә Сибай ҡалаһында беҙҙең проблемаларыбыҙҙы хәл итә алырлыҡ мәҙрәсә төҙөлә. Беҙ уны яҡын арала аса алаҫағыбыҙға ышанабыҙ. Әгәр ҙә мәҙрәсә асыла икән, халҡыбыҙ рухи яҡтан күтәреләсәк, иншаллаһ. Сибай мәҙрәсәһе халҡыбыҙҙың рухи нигеҙе буласаҡ. Уны төҙөп бөтөүҙе тағы 5 йылға һуҙһаҡ, күп йәштәребеҙҙе юғалтасаҡбыҙ.

**▶ Мәҙрәсәләрҙә ғилем, әхлаҡ бирелә. Ләкин уларҙа ваххабиҙар идеялары өйрәте-**

# БАҠСАҺЫНА ИНЕП...

## емешен тапһын

Конституцияһы беҙҙең (мосолмандарҙың) мосолман булмаған халыҡтар менән төҙөгән килешеүебеҙ ул. Паспорт алған сағыбыҙҙа ошо килешеү менән риза булыуыбыҙҙы белдереп, имза ҡуябыҙ. Тимәк, мосолман булараҡ, уны үтәргә тейешбеҙ. Боҙҙоҡ икән - тимәк, беҙҙә ике йөҙлөлөктөң бер сағылышы барлыҡҡа килә.

**М. Лоҡманов:** Һарайға 100 ҡапҡа бар, ти. Шуларҙың етмеше асыҡ, ун бише - шикле, тағы ла ун бише - ҡәтғи рәүештә ябыҡ. Мосолман кешеһе нимә эшләй? Ул асыҡ етмеш ишекте файҙалана. Етмеш ишек, тигәс тә, йәмғиәт шул ишектәрҙең өсөнөн генә файҙалана. Ҡалған алтмыш ете ишек буш тора. Ә кемдер ул 67 ишекте асыу яғында түгел, теге 15 тыйылған ишеккә барып тибә. Шуның менән үҙенә ҡаршылыҡтар тыуҙыра. Мәҫәлән, Баймаҡ районында етмешләп мәсет бар икән, нишләптер Баймаҡ ҡалаһындағы мәсетте баҫып алырға тырыша берәү. Һинең әле 60 мәсетең буш тора! Нинә шуларға барып ғилем өйрәтмәйһең? Шуға ла, беҙҙе хөкүмәт ҡыҫа, тип әйтер алдынан, "Әле мөмкинлек биргән әйберҙәрҙе эшләйбеҙме һуң?" тип, үҙ-үҙебеҙгә һорау бирергә кәрәк. Бөгөн беҙҙә мәҙрәсәләр төҙөү, уларҙа ғилем биреү ишектәре ап-асыҡ тора, ана шуны ҡулланырға кәрәк. Яҡшылыҡ менән барған эш бәрәкәтле була. Бәйғәмбәребеҙ бит кешеләрҙе үҙ янына яҡшылыҡ менән йәлеп иткән.

тейешбеҙ. Каруанһарай мәсетен халыҡ берҙәм төҙөгән бит. Сибай мәҙрәсәһен төҙөгәндә лә шундай фиҙакәрлек булһа ине. Тик әлеге ваҡытта халҡыбыҙ уның ысын әһәмиәтен аңлап етмәй.

**М. Лоҡманов:** Эйе, дин өлкәһендә беҙҙең милли кадрҙар етешмәй, Өфөлә башҡорт телендә вәғәз алып барылған бер генә мәсетебеҙ ҙә юҡ. Өйҙән-өйгә йөрөгән муллаларҙың 95 процентын икенсе халыҡ вәкилдәре тәшкил итә, шул сәбәпле милләттәштәребеҙ икенсе телдә саҡырыуҙар ишетергә мәжбүр. Ә бит дәғүәттең кешенең тыуған телендә алып барылыуы - сөннәт. Һис шикһеҙ, Сибайҙағы уҡыу йортон күтәреү - Аллаһтың әмерен үтәү ул.

Мин ошонда төрлө бәхәстәр тыуҙырған тағы бер мәсьәлә - традицион ислам хаҡында бер аҙ әйтеп китәйем әле. Ислам дине бөтә халыҡтар өсөн камил итеп бирелгән бер диндер. Шуның өсөн ул һәр халыҡта аңлау тапты. Ул Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр үҙгәрмәйәсәк дин ғилеме. Көн һайын фарыз булған биш намаҙ һәр саҡ биш намаҙ булып ҡала. Намаҙҙы башҡортса уҡырға йә өс тапҡырға ғына ҡалдырырға ярамай. Рамаҙан айын да йәйҙән көн ваҡыты ҡыҫҡа булған ҡышҡа күсереү мөмкин түгел.



Традицион ислам, тигәндә, фарыз булмаған, дингә ҡаршы килмәгән, әммә һәр халыҡҡа хас булған үҙенсәлектәрҙең көнкүрештә ҡулланылыуын әйтәләр (ләкин традицион ислам тигәндәре табын артында араҡы эсергә ярай, намаҙ уҡымаһаң да була, тигәнде аңлатмай). Милли йолалар ислам динен пропагандалауға бик ныҡ ярҙам итә. Аш мәжлестәрен алайыҡ. Уларҙы төрлөсә ҡабул итергә була, ләкин ҡунаҡсыллыҡ беҙҙең халыҡтың матур сифаты ул. Шуға ла, аш мәжлестәре диндә юҡ, тип тыйырға тырышыу урынына ошо хаҡта әйтеүсегә дөрөҫ йүнәлеш биреп ебәреү күркәмерәк. Ҡөрьән, доғалар уҡылған аш мәжлестәре кемгәләр зыян итәме? Ғәрәп илдәрендә был юҡ, тип, ошолай эшләүселәрҙе тәнҡитләргә тигәнме? Шулай уҡ ғәрәп илдәрендә мәсеттәргә килгән кешеләр өсөн доға уҡып ултырған муллалар ҙа юҡ. Ләкин мәсеткә доға өмөт итеп килгән кешенең күңелен китеп, ошо муллаларҙы был ғәмәлдән тыйып ҡуйыйыҡмы? Күптәр дини дәрестәргә килмәйәсәк, ләкин туғандарына, үҙҙәренә доға уҡыуҙарын теләп, мәсеткә юл тотасаҡтар. Ошо форсат менән файҙаланып, дин әһеле Ҡөрьән генә уҡып ҡалмай, динде лә аңлатһа, насармы? Тик уларҙың ғәмәле "аҡсаға доға уҡыу" кәсебенә генә әйләнмәһен, быныһын иҫкәртеп торорға кәрәк.

Милли йолаларыбыҙҙа милли асылыбыҙ ята. Дингә ҡаршы килмәгән йолаларыбыҙҙы тыйырғамы ни? Бына ошоларға ҡаршы сыҡҡан мәҙрәсәләребеҙ ҙә бар. Унда уҡып сыҡҡан шәкерттәр халыҡ араһында фетнә тыуҙырып йөрөй. Йыш ҡына икенсе сиккә китеп, мөһим нәмәләр менән мөһим булмаған әйберҙәрҙе айырмайынса, дин тип, ғәрәп традицияларын да күндерә башлаусылар бар.

**▶ Һуңғы арала беҙҙең республикала христиан секталары хаҡында ла һөйләй башланылар. Был проблеманың беҙҙең милләткә ниндәй ҡағылышы бар?**

**А. Арыҫланов:** Әлбиттә, секталар мәсьәләһе бик киҫкен тора. Исламға хас булған кеүек үк, христиан динендә лә бар борсоуға һалған секталар. Шул секталар йоғонтоһонда урыҫ егеттәре Сүриәгә һуғышҡа сығып китә, беҙҙең башҡорттар фатирҙарын, машиналарын һатып, аҡсаларын кемдәргәлер тотторып ҡуя. Халыҡ уяу булырға тейеш, сөнки кеше башын бутап йөрөгән ул кешеләр бик йылғыр эш итә. "Иегова шәһиттәре" тигәндәре араһында башҡорт, татар телендә һөйләшкәндәр етерлек. Улар китап, гәзиттәр тараталар, өйҙәр буйлап, үҙ ҡараштарын аңлатып, таратып йөрөйҙәр. Телмәрҙәре күңелде иретерлек, шыма, ягымлы. Ләкин уларҙың маҡсаттары бер: үҙҙәренә яңы адептарҙы йәлеп итеп, үҙ идеологияларын таратыу. Шуға күрә, ҡулығыҙға шик тыуҙырған берәй дини китап килеп эләкһә, мотлаҡ урындағы имамға күрһәтегеҙ, уның менән кәңәшләшегеҙ.

**М. Лоҡманов:** Мин ошо китаптарҙың күптәрен уҡып сыҡтым. Хаҡ һүҙҙәр яҙыла һымаҡ, ләкин улар артында шул ҡәҙәре ҙур ялған ярылып ята. Ғилеме әҙерәк булған кеше уларҙы уҡый ҙа, үҙе лә һиҙмәйенсә, улар тоҙағына эләгеп, аҙаҡтан ҙур ҡаза күреүе лә бар. Хатта бындай аҙашыуҙарҙың психологик ауырыуҙарға, кешенең үҙ-үҙенә ҡул һалыуына, малдарынан, туған-тыумасаһынан баш тартыуына килтереүе мөмкин. Минең кәңәшем тағы ла ҡәтғирәк булыр ине. Ундай китаптар килеп эләкһә, уларҙы юҡ итегеҙ, уҡымағыҙ. Ҡайһы берәүҙәр, был китаптар барыбер бит Аллаһҡа яҡынайта, уларҙы уҡығандан һуң кешеләр мәсеттәргә йөрөй башлай, тип әйтә ул. Улай булыуы ла мөмкин. Тик киреһенсә булыу ихтималлығы күпкә ҙурыраҡ. Дин әҙәбиәтен махсус магазиндарҙа һатыу, мәсет эсендә генә таратыу ҡаралған. Урамда, фатирҙарға дини китаптар, гәзиттәр таратып йөрөү алымдарын беҙҙең мосолман дин әһелдәребеҙ ҡулланмай.

***Диниә назараты киләсәктә уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса комиссия ойошторасаҡ. Абруйлы имамдар, ғалимдар, дәүләт эшмәкәрҙәре инәсәк был комиссияға. Комиссия мәктәпкә тиклемге (мосолман балалар баҡсалары өсөн), йәкшәмбе мәктәптәре һәм юғары уҡыу йорттары өсөн ислам диненең беҙҙең ерлек өсөн традицион булған хәнәфи мәҙхәбенә нигеҙләнеп, берҙәм уҡытыу программаһы төҙөйәсәк. Әлеге мәлдә Сибай ҡалаһында беҙҙең проблемаларыбыҙҙы хәл итә алырлыҡ мәҙрәсә төҙөлә. Беҙ уны яҡын арала аса алаҫағыбыҙға ышанабыҙ. Әгәр ҙә мәҙрәсә асыла икән, халҡыбыҙ рухи яҡтан күтәреләсәк, иншаллаһ. Сибай мәҙрәсәһе халҡыбыҙҙың рухи нигеҙе буласаҡ. Уны төҙөп бөтөүҙе тағы 5 йылға һуҙһаҡ, күп йәштәребеҙҙе юғалтасаҡбыҙ.***

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Иблис кешене төрлө юлдар менән тура юлдан ситләтергә тырыша. Аҙаштырыу өсөн ул алдан да, арттан да, аҫтан да, өҫтән дә, уңдан да, һулдан да һөжүм итә. Ҡайһы берҙә дөрөҫ күренгән әйберҙәргә лә үҙ тоҙаҡтарын һалып ҡуя. Эйе, ихласлыҡ булмаһа, мәкерле тоҙаҡтарға эләгеү ҡурҡынысы ғәйәт ҙур. Шуға күрә лә һәр саҡ Аллаһы Тәғәләгә инанып, уға итәғәттә йәшәгән, уның ҡушҡандарын үтәгән, гонаһты гонаһ тип белгән, күңелендә ҡара уй, нәфрәт йөрөтмәгән, рәхимле, изге, ихлас кеше булып ҡалыу кәрәк. Ул саҡта бер сиктән икенсе сиккә һикермәйәсәкбеҙ, иншаллаһ.**

**Азамат АБУТАЛИПОВ**
**яҙып алды.**

✓ ***Һауалы, һалҡын ҡатындың ҡулдарына бала йәбешмәй ыҙалатты. Тик Ләйсән үҙен был хәлгә ышанырға, ышандырырға мәжбүр итте. Бәпесте иркә ҡосаҡта, ҡурсыуҙа итеп күрһә, уйлаһа, уға еңелерәк ине.***



Унынсымы, ун бишенсеме көн (хәҙер инде ул көн-төндөң иҫәбен дә юғалтҡан) илап арыған сабый һыңҡылдай-һыңҡылдай йоҡлап киткәс, Асия аяғөҫтө баҫып тороуҙан быуындары ҡатҡан аяҡтарын саҡ өҫтөрәп, душ ҡойоноп алмаҡсы булып, ванна бүлмәһенә юлланды. Үтеп барышлай, элекке ғәҙәтенсә, коридорҙағы оло көҙгөлә үҙенең сағылышына күҙ һалды. Һалды ла, шаҡ ҡатты. Ҡаршыһында танымаҫлыҡ бер ҡатын баҫып тора ине. Юҡ, ҡатын түгел был. Һәр хәлдә, Асия бынан бер-нисә көн элек уны кем тигәндә лә "ҡатын" тимәҫ ине.

Ипләп кенә сикәләре эскә инеп киткән битен, йоҡоһоҙлоҡтан тартылып өңөрәйгән күҙ ҡабаҡтарын бармаҡ остары менән һыпырҙы. Ғүмер буйы маникюрҙа йөрөгән тырнаҡтарын Тәлғәт тәүге көн үк ашыҡ-бошоҡ ҡырҡтырып ташлатҡайны, бармаҡтары ла тоҡосланып, ғәрипләнеп ҡалғандай күренә. Башында прическа тигәндең әҫәре ҡалмаған, күптән тараҡ күрмәгән сәстәре нисек етте, шулай ҡыҫтырылып, унан-бынан ҡойолоп төшөп тора. Өҫтөндә лә һөт еҫе, бала ҡоҫҡолоғо, һыҡраһы һеңгән сырыш халат...

Күҙ алдындағынан башы әйләнде Асияның. Был бит ул. Ул! Ҡасандыр бала сағындағы, бола донъяһында балаға батып ултырған әсәһе кеүек, анау һәпрә Гөлназ кеүек, бешмәгән Ләйсән кеүек... Юҡ! Юҡ, юҡ һәм тағы ла бер ҡат юҡ! Бының булыуы мөмкин түгел! Асия улар түгел! Уның бындай йәмһеҙ, ҡарауһыҙ, йонсоу булғыһы килмәй! Ҡатын йән асыуға аяҡтарына элгән тәпешкәләрен ырғытты ла, ваннаға йүгерҙе. Йәһәтләп, өҫтөндәге сирҡаныс кейемен һалды. Фу-у! Әлеге еҫ - бәпәй еҫе. Ул эс кейемдәренә хәтлем генә лә түгел, тәнгә лә, сәстәргә лә һеңгән ине. Асия ашығып, тәнен тызып-тызып еҫле шыйыҡсалар менән ышҡырға, йыуырға кереште...

* * *

Тәлғәтте өйҙә тынлыҡ ҡаршыланы. Был ни хәл? Ҡайҙа геүләп илаусы сабый? Ҡайҙа асыуы йөҙөнә сыҡҡан ҡатыны? Урамда йөрөйҙәрҙер, тиһәң, улар ярҙамсыһыҙ сығып йөрөй алмай. Шылтыратып ҡарауҙан башҡа сара юҡ.

- Алло. Асия, һеҙ ҡайҙа?

- Беҙ... Мин эштә.

- Нисек... эштә? Ә бала?..

- Тәлғәт, ҡайтҡас һөйләшербеҙ, - теге яҡтағы тауыш бер аҙ тынып торҙо. - Бер-ике сәғәттән өйҙә булам.

- Ә-ә... - бәйләнеш өҙөлдө, - с-сия... - Тәлғәт аптырауынан ҡулындағы телефонына тексәйеп тора бирҙе.

Саҡ көтөп алды ҡатынын. Сағыу ҡыҙыл машина өйөрөлөп килеп туҡтар-туҡтамаҫтан, ишеген һелкетә тартып асты:

- Ҡайҙа бәпәй?

Асия тыныс ине. Ул был ваҡиғаға, был һөйләшеүгә алдан әҙерләнгән, күрәһең.

- Тәлғәт, ярһыма, хәҙер барыһын да аңлатам...

- Башта әйт: ҡайҙа бала?

- Бала приютта. Ваҡытлыса приютта, - ире шаңҡып торған арала ҡатын йәһәтерәк әйтеп ҡалырға ашыҡты. - Мин уны бер аҙ хәл алғансы, эштәрҙе яйға һалғансы тип кенә приютҡа тапшырып торҙом. Унда уны яҡшы ҡарайҙар, тәрбиәселәр, медиктар... Тәлғәт, минән яҡшыраҡ ҡарайҙар улар!

Яңы ғына иҫен юйып ҡолап барған кеүек булған ир, аңғармаҫтан, ҡатындың ҡупшы өйөлгән сәс бөҙрәләренән маҡып тотоп алды ла, бер тартыуҙа машина салонынан йәлпелдәтеп килтереп сығарҙы. Сығарҙы ла, елтерәтеп баҫтырып ҡуйҙы. Ҡатын ҡысҡырырға асҡан ауыҙын ҡороға ташланған балыҡ кеүек асып-яба ғына алды.

- Ҡайҙа бала? Ниндәй приютта?

- ...

- Ултыр рулгә! Хәҙер үк барып алабыҙ!

Ул арала Асия ла телгә килә алды. Телгә генә түгел, асылына ла килде ул.

- Юҡ, Тәлғәт! Мин көнөтөнө ошонда ултыра алырлыҡ бала ҡараусы тапмай тороп, уны бында алдырмайым! Һиңә рәхәт, эштә тик йөрөйһөң, ә мин нимә, йүргәк йыуыусымы әллә? Шуның өсөн икешәр институт уҡығанмынмы? Шуның өсөн ҡолағансы тырышып, карьера эшләгәнменме? Сәңгелдәк янында өйөрөлөп алйыр, бисураға әйләнер өсөн ошондай донъя йыйғанмынмы мин? - хәҙер инде Асия үҙе Тәлғәттең өҫтөнә менеп бара.

- Ә һин нимә, бала үҫтереүе еңел икән тип уйлағайныңмы? Мин ярҙам итмәйемме ни? Эшкә алып китә алмайым бит инде! - ир кеше илай яҙып асырғанды.

- Алып кит! Теләһә ҡайҙа ит! Һин теләнең уны! Һин! - ҡатын сәскәле түтәл ситенә лып ултырып, илай-сәсәй ҡысҡырҙы. Уның менән генә лә туҡтай алмай, ҡулына эләккән сәскәләрҙе йолҡоп алып бәрҙе, туҙҙырҙы. Был йәмһеҙ күренеште баш һелкеп ҡарап торған ире уның ҡаршыһына сүгәләне:

- Асия... - эйәгенән тотоп үҙенә ҡаратты, - Асия, һин бит уны бөтөнләй яратмайһың, шулай бит?.. Әйт әле дөрөҫөн... Асия?.. Кәрәкмәй бит ул һиңә?..

Ҡатын сәбәләнеүҙән туҡтаны. Бер аҙға тынды. Унан туптура секерәйеп ҡараны ла:

- Эйе, - тине, - яратмайым. Минең уға бер ниндәй ҙә тойғом юҡ. Арыным... ялҡтым. Инде лә күрер, ҡарар әмәлем ҡалманы... Хет үлтер, Тәлғәт... Хет үлтер...

Ир ҡалҡынып баҫты. Бер мәлгә башын юғарыға күтәреп һауаға ҡарап торҙо, унан аҙашҡан әҙәмдәй, ян-яғына күҙ һалды, унан тағы ла аяҡ аҫтында бөршәйеп ултырған ҡатынына ҡараны һәм ят, һалҡын тауыш менән өндәште:

- Адрес!

* * *

Ләйсән үҙ фатирында көн итеп ята. Бер бүлмәле генә булһа ла үҙенеке. Бынан уны бер кем дә төн уртаһында килеп ҡыуып сығармай, һүкмәй, ҡурҡытмай. Үҙе бикләп сығып китә, асып килеп инә. Йән рәхәтендә йәшә лә йәшә лә бит, әгәр ул йән рәхәте булһа икән. Юҡ шул, юҡ. Булғаны ла юҡ һәм, аңлауынса, инде булмаҫ та. Онота алманы ул. Онота алманы. Әллә онотторға теләмәнеме? Ярһып илаған бала тауышы ҡолаҡтарында сыңлап тик торҙо. Ә ул еҫ. Әскелтем-татлы, башты әйләндерер татлы еҫ. Бәпәй еҫе. Шул еҫте тойор, ҡайҙандыр тотоп алыр, эскә йотор өсөн ҡомһоҙланып еҫкәнде, күҙҙәрен йомоп, тыны бөткәнсе һауа һуланы. Тик ул бәхеттең инешен тапманы...

Йоҡоһо ҡасты Ләйсәндең. Ябыҡты. Былай ҙа өндәшмәҫ йән бөтөнләй йомолдо. Көҙгөгә ҡарамай ул хәҙер. Унда тере күләгә булып баҫып торған, балаһын һатҡан ҡатынды күрә алмай. Ә был яҡтағы ҡатын ҡыҙсығы - Сулпаны өсөн генә йәшәй, йәшәргә тейеш.

Көн дә телефонын алды ла, юйып ташланған, әммә хәтерҙә уйылып ҡалған һандарҙы йыйҙы. Йыйҙы ла шылтыратырға көс тапманы. Йыйҙы ла юйҙы, йыйҙы ла юйҙы. Ярамай! Асия апай бер ваҡытта ла шылтыратмаҫҡа, килмәҫкә һәм бер ерҙә лә килеп осрамаҫҡа, осрағанда ла танымаҫҡа тип ҡат-ҡат киҫәтмәнеме ни. Киҫәтте генә түгел, бик етди проблемалар менән янаны. Былай ҙа хәсрәттәре аҙмы инде...

Шундай әүрәү уйлап тапты: төн уртаһында ҡараңғылыҡҡа текәлеп, бала тәрбиәләп йөрөүсе Асия апайын күҙ алдына килтерә. Ул сабыйын һөйә, иркәләй, устарына ултыртып һикертә. Бындай күренеште башҡа һеңдереүе бик ауыр булды башта. Һауалы, һалҡын ҡатындың ҡулдарына бала йәбешмәй ыҙалатты. Тик Ләйсән үҙен был хәлгә ышанырға, ышандырырға мәжбүр итте. Бәпесте иркә ҡосаҡта, ҡурсыуҙа итеп күрһә, уйлаһа, уға еңелерәк ине. Шулай булырға тейеш, әлбиттә, шулайҙыр, башҡа нисек булырға мөмкин һуң? Унда бит Тәлғәт ағай ҙа бар. Тәлғәт ағай... Тәлғәт... Тә...

- Туҡ-туҡ... Туҡ...

Осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарын бүлеп, кемдер һаҡ ҡына ишек ҡаҡты.

- Туҡ-туҡ... - Ысынлап та, бик һаҡ ине ул. Әйтерһең, кемделер рәнйетеүҙән, ҡурҡытыуҙан һаҡлана.

Ләйсән тороп халатын кейҙе лә, аяҡ остарына ғына баҫып, ишеккә атланы. Ипләп, тышта торғандарға һиҙҙермәй генә килеп, "күҙ"гә терәлде:

- А-аh!.. - Шунда уҡ хәле бөтөп шыуып та төштө.

Ишек артындағылар телгә килде:

- Ләйсән, ас... бәпәй асыҡты...

**(Аҙағы. Башы 26-31-се һандарҙа).**




## *АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*




### "Абдр"ҙы ҡайҙа иттең?"

Ауылда үтә һаранлығы менән дан алған Фәхри ағай йәшәне. Ул ҡайҙа китһә лә, бөтөн нәмәгә билдә һалып китер булған. Бер көндө был ларҙағы ондоң өҫтөнә "Абдрахимов" тип яҙып киткән. Ҡайтыу менән яҙыуҙы ҡарай һалған, "Абдр"ы юҡ икән. "Абдр"ҙы ҡайҙа иттең?" тип, ҡатынын туҡмай башлағас, меҫкен Миңниса еңгә:

- Ашаған һалмаң шул "Абдр" бит, - тип асыуланып ҡысҡырған. Әле лә берәй нәмә юғалһа, "Абдр"ы ҡайҙа, тип көләләр. Һаранлыҡ та ғүмерҙе оҙайта икән ул.

### Ҡорамалай сағыу баһалар

Рисәләт 3-сө класта тырышып уҡып йөрөй. Тик ҡайһы көндө хөртөрәк баһалар менән ҡайта. Атаһы ҡыҙыҡһынып: "Йә, ҡыҙым, ниндәй баһалар менән шатландыраһың?" - тип һорай. Ҡыҙ аптырап тормай: "Ҡорамалай сағыу, матур, төрлө-төрлө баһалар алдым бөгөн", - тип яуаплай. Был инде бишле, дүртлеләр янында икеле барлығын ла аңлата. Әммә йор һүҙ менән әйтелгән яуапты атаһы төбөнәсә аңламай, ҡыҙын маҡтай.

Йор һүҙ менән һөйләшә белһәң, шелтәнән дә, төрлө бәләнән дә ҡотолоп булғанын бала ла аңлай шул.

### Силәбелә аҙаштыр шуны

Асия апай улы Сәмиғулланы яңғыҙ үҫтерҙе. Малай бик еңмеш, телдәр, ал бирмәҫ булып үҫте. Әсәһе менән дә, ҡатыны Саимә менән дә "телләште", ғауғалауҙы хуп күрҙе. Әсәһе ялҡҡандыр инде, бер көндө килененә:

- Шул Сәмиеңде Силәбегә апарып аҙаштырһаңсы, ҡотолор инек, - тимәһенме. Килене рәхәтләнеп көлөп:

- Ул бит армияла саҡта бөтә Рәсәйҙе гиҙгән, Силәбе нимә генә инде уға, - тигән.

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТ

# ТӘБИҒӘТТӘ ШУЛАЙ,

## ә беҙҙә ҡырын тейәү ҙә ғәйеп түгел

**Хәҙер төрлө бөжәк-йәнлектәрҙе видеоға матур итеп төшөрөп алырға оҫтарып алдылар. Был йәһәттән бигерәк тә сит илдекеләр алдыра, буғай. Бәләкәй генә йән эйәһенең йәшәү рәүешен шундай оҫта итеп һүрәтләйҙәр, аптырауҙан баш сайҡарға ғына ҡала. Ә бына һуңғы ҡараған видеояҙма мине бер аҙ уйға һалды. Мине генә түгел, ә күптәрҙе уйландырырлыҡ ғибрәтле хәл булды был. Был видеояҙмаға тәбиғәттә көн күргән ҡырағай бал ҡортоноң монологын төшөрөп алғандар. Ул монолог ошолайыраҡ яңғырай:**

- Мин эшсе ҡорт булам. Тәү мәлдәрәк, бәләкәйерәк саҡта, гел генә оя эсендә эшләнем. Бында эш әллә ни ауыр ҙа түгел, килгән аҙыҡты ҡабул итеп кенә торҙом. Әммә барыбер эстән генә болоҡһоп йөрөнөм. Сәбәбе лә ябай ғына - күңел иркенгә, тәбиғәткә тартылып тик тора! Ҡанаттарҙы ихлас ҡағып, рәхәтләнеп осоп йөрөгә килә. Бына, ниһайәт, зарығып көткән мәлем килеп етте. Эш буйынса мине үрләтеп ебәрҙеләр. Хәҙер мин урман-ҡырҙар гиҙеп, күңелем булғансы иркенләп осоп йөрөйөм.

Рәхәтләнеп, тип, бер аҙ арттырып ебәрәм инде. Бушты бушҡа бушатып осоп йөрөргә кем рөхсәт итһен инде? Оянан осоп сыҡҡан һәр ҡорт ниндәйҙер эш башҡарып ҡайтырға тейеш. Ә эш һәр кемгә бүленгән беҙҙә. Кемдер һыу ташый, кемдер һеркә йыя, тигәндәй. Бына мин, әйтәйек, һут ташыйым. Хуш еҫле сәскә тажына барып төшәм дә, рәхәтләнеп татлы һутты һурам. Ошо һутты хәлдән килгәнсе тейәп алам да, осам кире ояға табан.

Бына әле осоп ҡайтым киләм, ә күңел бер аҙ борсолоп тора. Осоп ҡайтҡан һыңғайы ояға инеп китеп булмай әле. Ишек төбөндә беҙҙе уҫал һаҡсы ҡорттар ҡаршы ала. Кем ниндәй аҙыҡ алған, күпме миҡдарҙа алып ҡайтҡан - бар тикшереү улар аша үтә. Ана, бер йәш ҡорт уларға нимәләр аңлатмаҡ була. Алып ҡайтҡан аҙығы әҙерәктер, күрәһең. Ә мин белеп торам, иң һәйбәте - һаҡсы ҡорттар менән бәйләнмәҫкә. Иң отошлоһо - үҙ эшеңде намыҫ менән башҡарырға кәрәк! Был ваҡытта инде һиңә берәү ҙә бәйләнеп тормаясаҡ. Аллаға шөкөр, был юлы мине һыңғай ғына үткәреп ебәрҙеләр.

Ояға ингәс, минең эргәгә эстә эшләүсе ҡорттар йүгереп килеп тә еттеләр. Ай-һай, бар ине заманалар, ваҡытында мин дә ошолай йүгереп йөрөгәйнем бит. Улар мин алып ҡайтҡан аҙыҡты тиҙ генә ҡабул итеп алдылар ҙа, саптырышып китеп тә барҙылар. Улар аҙыҡты кәрәҙҙәргә һалып сыға. Беҙгә ошолай эшләүе уңайлы. Һәр кемдең тәғәйен эше булғас, берәү ҙә ҡаңғырып йөрөмәй ояла. Юғиһә, мин йөрөр инем әле тегеләйбылай һуғылып, алып ҡайтҡан аҙыҡты ҡайҙа бушатырға белмәй ҡаңғырып. Ярай, һеҙҙең менән оҙаҡ ләпелдәп торорға минең ваҡыт юҡ, миңә тиҙерәк кире осорға кәрәк.

Ә һеҙ, кешеләр, бигерәк ләпелдәргә яратаһығыҙ, буғай. Хатта бейек-бейек йорттар төҙөп, шунда йыйылып, көндәр буйы һөйләшәһегеҙ бит. Аптырарһың, нимә һөйләшәһегеҙҙер инде. Ә ваҡыты менән әрпеш тә булып китәһегеҙ, шикелле. Әле бына осоп килә ятҡанда иғтибар итә ҡуйҙым, берәүҙәрҙең өҫтәлендә шәкәр түгелеп ятып ҡалды. Беҙҙә ҡаты тәртип, ә кешеләрҙең берәүһе, исмаһам, ыһ, тип әйтһәсе. Юҡ, иҫтәре лә китмәне. Ә был беҙгә өҫтәмә аҙыҡ, әлбиттә. Ҡайны ваҡыт ошоноң һымаҡ түгелеп ҡалған шәкәрҙән апарыҡ аҙыҡ туплап алабыҙ.

Ә бына был юлы минең иғтибарҙы өҫтәлдә йәйрәп ятҡан тамсы йәлеп итте. Нимә икән ул? Мин уны ипләп кенә тәмләп ҡарарға батырсылыҡ иттем. Был тамсы бик тәмле тойолдо миңә. Туйғансы эсеп алдым уны. Һыра тамсыһы икәнен кем белгән уның. Мин быны аҙаҡтан, эш үткәс кенә белдем. Ләкин һуң ине инде. Ә әлегә миңә рәхәт, эш ҡайғыһы китте. Башҡа әллә ниндәй уйҙар килә башланы. Эш бүре түгел, урманға ҡасмаҫ, эшләп кем байыған, тигән уйҙар баҫа бит әй. Батырға ла ял кәрәк, йәнәһе. Атыу, эшләйһең-эшләйһең, бер ҡәҙереңдә юҡ, исмаһам, берәүһе рәхмәт әйтһәсе. Бына мин ҡасандан бирле эшләйем, ял төҫөн күргән дә юҡ. Шуға үс итеп, бөгөн рәхәтләнеп ял итеп алам...

Һыраны тағы берҙе һурып алдым да ҡайтырға булдым. Әммә ни ғәләмәт - күтәрелеп осоп булмай ҙа ҡуя. Алай итә, былай итә, этә-төртә, ҡыйшаямыйшая саҡ осоп киттем. Үҙемдең килеп тороп көлкө килә. Бына әле эстән генә оҙон көйҙәрҙе көйләйкөйләй, осоп барам. Айлы-көйлө осоп барған мәлдә ҡапыл ҡайын япрағына һуғылып, оҙон үлән араһына барып ятҡанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Көс-хәл менән тороп ултырҙым. Баш зыр әйләнә, быуындар тотмай, ә шулай ҙа рәхәт. Әй, нәплевәт донъяһына, ятам да йоҡлайым...

Бына, исмаһам, бер рәхәтләнеп ял итеп алынды. Хәҙер ҡайтырға кәрәк. Әй әттәгенәһе, ҡайны яҡҡа осорға икән? Тамам баш буталды бит, әй. Өй яғын табып булмай ҙа ҡуя. Шулай ҙа ял иткән ял иткән инде. Был юлы күтәрелеп осоп китеүе күпкә еңелерәк булды. Осоп бара биргәс, өй яғын да аныҡ билдәләй алдым. Бына минең тыуған йорт. Әммә минең күңелде шомло уйҙар биләп алды. Нимә көтә мине унда? Ошо уй тынғы бирмәй. Ҡаушауҙан, ояға тәү тапҡыр тура килеп ултырып булманы. Тәүҙә эргәләге үләнгә барып йәбештем, ә аҙаҡ иплән кенә ояға үрмәләнем. Ә унда мине уҫал һаҡсы ҡорттар ҡаршы алды һәм үткер ҡараштарын миңә төбәне: "Йә, ҡайҙа йөрөнөң, нимә алып ҡайттың?.."

...Тәбиғәттә тормош аяуһыҙ шул. Эсеп һәм буш ҡайтҡан был ҡортто һаҡсы ҡорттар оянан этеп төшөрҙөләр ҙә, аяҡтарын ҡырҡып ташланылар. Бер ниндәй ҙә аңлатыу эше алып барманылар, тәрбиәләп тә торманылар...

Әле шуны уйлап ултырам. Беҙҙең, әҙәмдәрҙең тормошо улай булмағанға әллә ҡыуанырға, әллә иларға...

**Әгләм ШӘРИПОВ.**

---

Ҡәйнәһе һаман:

- Юҡ, барыбер Силәбе ҙур ҡала, унда аҙашыр ул, - тип ныҡыша икән, ауылынан бер мәртәбә лә ситкә сығып йөрөгәне булмағас. Әле лә күп "лығырҙаған" кеше осраһа, "Силәбелә аҙаштырырға кәрәк", тип көлөшәләр. Күрмәгән әйбер ҙур күренгән инде ҡәйнәгә.

### Тешең миңә ҡалыр ине

Нәбиулла ғүмере буйы тимерлектә эшләне, унан да оҫта тимерсе булмағандыр. Әммә йөштән үк теше ҡойолоп бөттө, эшенән дә, витамин етмәүҙән дә күрҙеләр. Ә бына Заһит ағайҙың тештәре үлгәндә лә аппаҡ, теп-теүәл булды. Нәбиулла уны күрһә:

- Ағай, йәһәтерәк үлһәң ни була, тештәрең миңә ҡалыр ине, - тип тәләкәләй, тегенеһе көлә. Әммә Нәбиуллаға "теш ҡалманы", үҙе алдан китте. Әле лә, аҡ тешлеләр күренһә, шул икәүҙе иҫләп көлөшәләр. Һәр һораған нәмә һиңә эләкмәй шул.

### Хәбир вагон һанай

Хәбир үҙе лә, ҡатыны Мәбүрә лә колхозда ял белмәй эшләнеләр. Алдыңғы һауынса Мәбүрәне санаторийға ебәрҙеләр. Иптәштәре Хәбирҙе төрләсә тәләкә итә:

- Ҡатының ҡайтмаһа, ни эшләрһең икән? - тип тә ебәрәләр. Хәбир уйға ҡала. Мал көткән ергә тимер юл яҡын, был көн дә вагондар һанап, күрәҙәселек ҡыла:

- Ҡайта-ҡайтмай, ярата-яратмай...

Гел "ярата" сыға, шатлана.

Мәбүрә ял итеп, шатланып, күп күстәнәстәр менән ҡайтып төшә. Хәбирҙең күңеле хуш. Күптән улар юҡ инде, әммә вагон һанау мәрәкәһе йәшәй. Мәрәкәләр ҙә кеше ғүмерен оҙайта бит ул.

### Моратша ҡайтыр инде

Морат ҡатыны Мәликәгә яратып өйләнде. Ләкин тора-бара яратыу хистәре әрләшкә, шунан йоҙроҡҡа әйләнде. Ҡайҙан ғына ҡайтһа ла ҡатынын туҡмар булып китте. Баҡтиһәң, уның үтә ышаныусан булыуынан файҙаланған иптәштәре ҡатыны тураһында ғәйбәт һата икән. Меҫкен ҡатын гел ҡурҡыуҙа йәшәргә мәжбүр булды. Күршеләре менән дә аралашмаҫ ине. Берәйһе инһә:

- Моратша ҡайтыр инде, йоҙроҡлап һуғыр инде, һуҡһа, ауыртыр инде, тәнем ҡарайыр инде, - тип һамаҡлар булды. Шулай ҙа Моратшаның аҙаҡ аҡылға ултырттылар ултыртыуын, ғәйебен таныны, иплəнде. Әммә Мәликәнең һамаҡлауы әле лә халыҡ телендә килеп сыҡҡылай. Яҡшы ла, яман да оҙаҡ йәшәй бит ул телдә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

---

ЗАУЫҠ



## ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

...Баламдың уңыштарына
Шул тиклем ныҡ шатландым:
Әйтерһең, атҡа атландым,
Әсәйемә маҡтандым.

Асыуланды әсәй-бәгерем,
Төйәләп китте ҡаштар:
"Баланды үҙең маҡтама,
Кешеләр маҡтаһындар!"

Бүтән бала маҡтаманым...
Дөрөҫ эшләнем микән?
Сабыр ғына көтөп торам:
- Нимә әйтерҙәр икән?

Балаҡайҙарым, һеҙ бер үк
Битемде ҡыҙартмағыҙ,
Ел-ямғырға бирешмәгеҙ,
Тормошта һынатмағыҙ!

...Балаларым был тормошта
Ныҡ баҫып атлаһындар.
Үҙ баламды маҡтамаҫмын -
Кешеләр маҡтаһындар!

* * *

Ете ҡыҙ үҫтек бер өйҙә,
Һүҙебеҙ күп булғандыр,
Шуға ла артыҡ хәбәрҙән
Әсәйебеҙ тыйғандыр.

Тыя ине, юҡ-бар һүҙҙе
Барыһына һөйләтмәй:
"Бисә-сәсә хәбәрҙәрен
Ир-ат белеү кәрәкмәй".

Атайым да ҡыҫылманы
Ҡатын-ҡыҙ хәбәренә,
Һөйләтмәне, тыңлатманы
Ауылдың ғәйбәтен дә.

"Оялағы - оҫҡанда", ти:
Еҙнәйҙәрем дә ғорур,
Арлы-бирле ғәйбәттәргә
Көләп ҡарайҙар сабыр.

Аҙ һүҙле, олпат, сабырлы
Минең икенсе яртым.
Холҡо менән атайыма,
Еҙнәйҙәремә тартым.

Шуға микән, йәнем һөймәй
Ғәйбәт һөйләгән ирҙе,
Аҙмы ни шундай бәндәләр
Бысратып йөрөй ерҙе?

Хөрмәт итәбеҙ ирҙәрҙең
Ысын ир холоҡлоһон:
Баҫалҡы, тыныс, сабырлы,
Ғорур, ышаныслыһын.

Был донъяла һәр кем эҙләй
Үҙенә тиң кешене,
Ғүмерлеккә юлдаш итеп
Һайлай үҙе ишене.

Әсәйемдең был һабағы
Хәтерҙән бер ҙә китмәй:
"Бисә-сәсә хәбәрҙәрен
Ир-ат белеү кәрәкмәй".

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАҒЫҘ АҠСА УРЫНЫНА...

## электрон карта

■ Британияның Сент-Эндрюс һәм Лидс университеттары ғалимдары кислотаға бирешмәүсе яһалма эмаль уйлап табыу өҫтөндә эшләй. Ул тәбиғи эмаль торған кальций фосфатынан яһаласаҡ. Ғалимдар билдәләүенсә, яңы эмалде тештәргә лазер ярҙамында һиптереп сығырға мөмкин буласаҡ. Был яңы технология 3-5 йылдан барлыҡҡа киләсәк һәм тештәрҙе һаҡлауҙа ҙур ярҙам күрһәтәсәк.

■ Япония ашханаларында оялсан кешеләр өсөн махсус өҫтәлдәр ҡуйғандар. Ул урында башҡалар менән бергә ашарға тартыныусылар ултырасаҡ. Оялсандар өсөн тәғәйенләнгән урындар, офистарҙағы кеүек, башҡалар күҙенән ышыҡлап тороусы ҡоролмалар менән ҡапланған. Нишләптер, был урындарҙы студенттар үҙ иткән, уларҙың ҡайһы берҙәре хатта ашханаға йышыраҡ йөрөй башлаған.

■ Market research company Ipsos MORI төркөмө белдереүенсә, Европала йәшәүселәр компьютер, смартфон һәм планшеттарынан тыш йәшәүҙе күҙ алдына ла килтермәй. Бигерәк тә Испания халҡы барыһын да уҙҙырып ебәргән, улар социаль селтәрҙәргә һәм башҡа интернет-наркотиктарға көнөнә 8 сәғәт тә 48 минут ваҡыт сарыф итә. Икенсе урында итальяндар тора - 7 сәғәт тә 48 минут, өсөнсө урында Норвегия халҡы - 7 сәғәт тә 36 минут. Был күрһәткес буйынса иң алдынғы ун ил исемлегендә Германия, Швейцария, Венгрия, Швеция ла бар. Барселонала йәшәүсе, яңы технологиялар һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тайпылыштар буйынса эшләүсе психолог Марк Масип белдереүенсә, үҫмерҙәр ҙә интернетта ваҡытын күп үткәрә. Йәш испандар башҡа илдәрҙә йәшәүсе тиҫтерҙәренә ҡарағанда, ике тапҡырға йышыраҡ интернет гиҙә. Рәсәй кешеһе уртаса тәүлегенә 7 сәғәт компьютер артында ултыра.

■ Норвегия аҡсаһыҙ йәмғиәт төҙөү буйынса эштәр башлаған. Алты йылдан был дәүләт тик электрон аҡсаға күсмәксе. Былдай тәҡдимде банктар һәм страховкалау компаниялары белдергән. "Ҡағыҙ аҡсаның әйләнештән сығыуы, иң тәүҙә, талауҙарҙы юҡҡа сығара. Икенсенән, был осраҡта финанс енәйәттәр менән көрәшеүе енеләшә, сөнки электрон түләүҙәрҙе күҙәтеүе күпкә енелерәк. Өсөнсөнән, йәмғиәт был яңылыҡтан отасаҡ ҡына", - ти Finans Norge ойошмаһы директоры Идар Кройцер. Был ойошма үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Норвегия халҡы күптән пластик картапарға өҫтөнлөк бирә, шуға ла ҡағыҙ аҡсалар менән һирәк ҡуллана.

■ Интернеттың йәш ҡулланыусылары араһында элекке концлагерҙар фонында йылмайып йәки ғәҙәти булмаған берәй позала фото төшөү модаға инә. Инглиз һүҙе "селфи" менән аталып йөрөтөлгән үҙ-үҙеңде фотоға төшөрөү шөғөлө шул тиклем популяр. Үлем һәм бәхетһеҙлек фонында үҙҙәрен мәңгеләштереүгә ратыусылар хатта махсус сайттарҙа былдай фотоларҙы йыйып бара. Йәмәғәтселек фекеренсә, үкенескә күрә, үҫмерҙәр араһында былдай ғәҙәттең көсәйеүе уларҙың күңелендә мәрхәмәтлек һәм йәлләү тойғоларының юҡҡа сыға барыуы күрһәткесе булып тора.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ



# УЙЫЛДАН МУЛЛА

**Халҡыбыҙҙың аҫыл заттарҙың береһе - Бөрйән районы Үргө Нөгөш ауылы муллаһы Уйылдан Мөхәмәҙиә улы Аҫылғужин тураһындағы хәтирәләремде дауам итәм.**

### Байназар ауылынан Көнһылыу Ҡотлобаева һөйләгәндәрҙән

Урамдан йүгерә-атлап әсәйем ҡайтып инде. Ауылға Уйылдан мулла килгән, сират буйынса беҙгә лә киләсәк, тине. Ҡустым менән икебеҙҙең дә күҙебеҙ упайған. Дүрт күҙ менән көтәбеҙ. Ысын мулланы үҙ күҙебеҙ менән күрәсәгебеҙгә иҫебеҙ китә. Аптырағаным шул булды: ул китаптарҙа яҙылғанса, сәллә ураған, ҡап ҡорһаҡ, ашамһаҡ ҡарт түгел ине. Бик ҡарт та түгел, тулыраҡ кәүҙәле, өҫтөндә заманса матур күлдәк, пуловер, үтекле салбар кейгән. Мулла икәнен белмәһәм, берәй укытыусы тип уйлар инем.

Беҙҙең электән көткән нәҫел һыйырыбыҙ бар ине. Йыл да быҙауы ҡазаланып тик торҙо. Быҙауһыҙ һыйыр һауҙырмай, өйгә лә ҡайтмай. Һыйыр - ул ауыл кешеһенең күҙ терәп торған төп байлығы. Беҙ уны аҫырайбыҙ, ул беҙҙе аҫырай. Ваҡыт-ваҡыт әсәйемдәр хөкүмәткә май тапшырырға тейеш. Донъя көтөргә иң кәрәкле әйберҙәрҙе лә аҡсаға алыу мөмкин түгел, майға, иткә, балға ғына һаталар. Уйылдан мулла ана шул һыйырыбыҙҙы өшкөрөргә тейеш. Әммә мине иң ҡыҙыҡһындырғаны уның һыйырҙы нисек тәрбиәләүе түгел. Бәләкәс ҡустымды (алты айлыҡ) ни эшләтер икән, тип көтәм. Ул тыуғандан бирле бары өс нәмәне генә белә: имә, йоҡлай һәм көн тимәй, төн тимәй, илай ҙа илай. Төндә әсәйем менән атайым алмашлап ҡарайҙар, ә көндөҙән ул минең ҡарамаҡта. Өй эсендәге эштәрҙе эшләгән арала мин уның уяныуын ҡарауыллайым. Саҡ ҡына аңғармай ҡалһам, һыны ҡата, һулышы туҡтай, күгәрә башлай. Үләме, тере ҡаламы, тип йөрәгем бөтә. Көнө буйы күтәреп йөрөүҙән арманһыҙ булам.

Уйылдан бабай химик ҡәләм (элек шундай ҡәләм була торғайны) менән доға яҙып бирҙе. Ул доғаны беҙ таҙа шешә эсенә һалып, өҫтөнә һыу ҡойҙоҡ. Мулла һыуҙы өҫтәп торорға ҡушты. Яҙыу юйылғансы ҡулланып була, тине. Беҙ ул һыуҙы ҡустымды сайындырған һыуға ҡушып файҙаландыҡ. Өс-дүрт тапҡыр ҡойондороуға илауы, сире ҡул менән һыпырып алғандай булды. Һыйырыбыҙ ҙа йыл да быҙауҙары менән ҡыуандырып торҙо. Мулланың урыны йәннәттә, күркәм заттар янында булһын, тим иҫемә алған һайын.

Заманында мине лә бит ул үлемесле сирҙән араланы. Ҡыҙым тыуғас, өҙләгеп сирләнем. Хәлһеҙмен, күберәк ятып торам. Төндәрен йоҡоноҙлоҡ тәҡәтте ала. Дауаханаға һалдылар. Инде врач аяҡҡа баҫтырҙы тигәндә, яңы афәткә тарыным. Бер кис астма өйәнәге сирлене минең ҡаршылағы койкаға һалдылар. Дөрөҫөрәге, һөйәп ултырттылар. Күпмелер ваҡыттан мин дә уға ҡушылып һығыла башланым. Таңға ҡатын был донъяны ташлап китте, сире миндә ҡалды. Шулай, өйгә йоҡоһоҙлоғома эйәртеп, астма алып ҡайттым. Әсәйемдең кәңәше менән Уйылдан муллаға барырға булдым. Ул саҡта бабай ишетмәй, кешеләрҙе ҡабул итмәй башлағайны.

Ямашҡа трактор арбаһы тулы кешеләр менән китеп барам. Атеизм заманында парторг, уҡытыусы ҡыҙының муллаға китеп барыуы күптәргә башҡа һыймаслыҡ хәл булып күренде. Бигерәк тә ирҙәр кисерә алмай бер булдылар. Булдыра алғансы көлдөләр, мыҫҡыл иттеләр. Ауыҙ ҡымтып түҙәм. Белєм: йоҡоһоҙлоҡто, унан бигерәк тә астманы медицина дауалай алмай. Көҙ картуф алған мәл ине. Мин барыуға әбейе сәй ултыртып йөрөй. Сәй эсеп алғас, инәй минә текәлде. Ә мин хәлемде нисек аңлатырға белмәйем, нимәләр һөйләгем дә килмәй. Уңарсы бабай:

- Бар, әбей, картуфына сыҡ,- тине. Шунан минә ҡарап:

- Бер ни ҙә һөйләмә, балам, мин барыһын да беләм, - тине бабайым. Алып килгән мәтрүшкәне, үҙемдә өшкөрҙө лә, ауылдағы күлдән томбойоҡ барып алырға ҡушты.

- Берәйһе артынан ебәр, өшкөрөрмөн. Шуны эсһән, эй, йоҡларһың, балам, эй, йоҡларһың... - тип, ҡыуандырып ҡайтарып ебәрҙе.

Йыл да үтмәне, был донъяларҙы ташлап китеп тә барҙы бабайым. Үҙе күренмәй генә төшөмә кереп, киткәнлеген минә аңғартты.

...Атайым атеист ине. Бер йылды тубығына тимер сым кереп, уналмаҫ сей ярағә әйләнде. Уның яраһын осраҡлы ғына күреп ҡалған мулла бабай дауаларға тәҡдим итте. Врачтар, дарыуҙар менән еңә алмаған яраны бабай, күҙ асып йомғансы тигәндәй, бөтәштереп ҡуйҙы. Атайымдың дәһрилеге ошонан башлап ҡаҡшаны, буғай.

...Муллаға китешләй, өҙәрем юлда күп кешеләр туҡталды беҙҙең өйҙә. Күбеһе Рәхим Хаммат улы кәңәше менән юлланған кешеләр ине. Рәхим Хаммат улы - районыбыҙҙың хөрмәтле врачы, үҙәк дауаханала эшләне. Ул атайымдың уҡыусыһы булған. Кешеләрҙе беҙгә төбәп ебәреүсе лә ул. Ҡайтыусылар барыһы ла ҡәнәғәт: мулла бабайҙың атын-затын, милләтен, динен һорап айырмай дауалауы, ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеүе тураһында ҡыуаныслы кисерештәре менән уртаҡлашыр инеләр. Уйылдан бабай еңә алмаған сир юҡ ине, тик ҡайһы берҙәрен генә: "Был балнистыҡы", - тип әйтеп ҡайтарыр ине.

### Іҫке Собханғол ауылынан Ғәлимә Йәғәфәрова һөйләгәндәрҙән

Ҡайнымдың күҙе шул тиклем ҡаты булды. Малғамы, балағамы һоҡланһа, тиҙ генә күҙе тейә лә ҡуя торғайны. Фәнисемде яратып, һоҡланып ҡарағандыр инде. Улым өс көн, өс төн алһыҙ-ялһыҙ иланы ла ҡуйҙы. Тымыҙын алыр әмәл юҡ. Аптырағас, баламды күтәреп, Ямашҡа Уйылдан муллаға алып киттем. Ғәжәп бит: бабай ҡапҡанан сығып көтөп тора, үҙе:

- Тиҙерәк булығыҙ, тиҙерәк булығыҙ!- тип, ҡул болғап, беҙҙе саҡыра . Килеп тә еттек, баланы эләктерә һалып, өйгә алып инеп тә китте. Өшкөрөп, дауалап бөткәс:

- Ярай әле, өлгөрөп ҡалдың, әҙ генә һуңлаһаң, балаң үлер ине, - тине.

Беҙҙең шундай мәшәҡәттәр менән килеүебеҙҙе алдан белеп, көтөп тороуы үҙе иҫ китерлек мөғжизә булды...

### Байназар ауылынан Сафия Хәсәнова һөйләгәндәрҙән

Уйылдан бабайҙы бик яҡшы хәтерләйем: йәшкелт күҙле, мыҡты кәүҙәле кеше ине. Уларҙың өйҙәре түмәләс өҫтөндә ине. Яңы өйөндә Уйылдан бабай кешеләрҙе үҙе тәрбиәләне, иҫкеһендә әбейе ҡабул итер ине. Ҡатынына күпселек ҡатын-ҡыҙҙар килде. Эсе түбәнләгән, бәпәй таба алмай ҡаңғырған ҡатындар Зәгифә инәйгә мөрәжәғәт итерҙәр ине. Был йортҡа Бөрйән районының килмәгән кешеһе ҡалмағандыр. Ҡолаҡ, күҙ ауыртһа ла, күҙ тейһә лә, ауырып китһәк тә, тиҙ генә атайым менән

БАЛАҢА УҠЫ!

# КИРБЕС

Борон заманда йәшәгән, ти, Морат исемле ярлы кеше. Ул Аллаһҡа ныҡ бышанған һәм бик әҙәпле булған. Бер ваҡыт өй стенаһын ремонтлағанда ул кирбес формаһындағы алтын тапҡан. Шатлығының сиге булмаған уның.

"Ниһайәт, ярлылыҡтан ҡотолдом! Үҙемә ҙур йорт төҙөп ултыртасаҡмын, иҙәндәре ап-аҡ мәрмәрҙән буласаҡ... Баҡсаһында матур гөл-сәскәләр үҫеп, күҙҙең яуын алыр. Төрлө емеш биргән ағастар ултыртырмын, уларҙың ботаҡтарында матур-матур ҡоштар һайрап ултырыр, бар ғәләмгә моң таратыр",- тигән татлы уйҙар менән йоҡоға сумған Морат.

Икенсе көнөнә төшөндә тағы ла матурыраҡ нәмәләр күргән: йәнәһе, уның өйө тулы хеҙмәткәрҙәр...

Көн һайын шулай хыял диңгеҙендә йөҙөп, Морат бар донъяһын онота: ашамай ҙа, намаҙҙы ла онота, барлыҡ сауаптарҙы биргән Аллаһы Тәғәлә хаҡына рәхмәт сүрәләре лә уҡымай.

Бер ваҡыт ҡала буйлап йөрөгәндә Морат зыярат ситендә кирбес һуҡҡан бер кешене осрата. Был кеше ерҙән балсыҡ ҡаҙып алып, уны һыу менән ҡушып, кирбес өсөн формаларға һалып тора икән. Ике ир һөйләшеп китә һәм эшсе Моратҡа ныҡлы кирбестәр эшләүҙең серен аса:

- Зыяраттағы балсыҡтан эшләнгән кирбестәр ныҡыраҡ була һәм оҙаҡ хеҙмәт итә.

Был һүҙҙәр Морат өсөн аяҙ көндә күк күкрәү кеүек яңғырай.

- Эх, ахмаҡ! Һинең ҡалдыҡтарыңдан да бит кирбес эшләрҙәр, килер шул көн! Ҡулыңа алтын килеп эләккәйне, һин башыңды юғалттың. Намаҙҙы ла, сүрәләрҙе лә оноттоң. Аҙым һайын һин үлемгә яҡыныраҡ була бараһың. Хыялдарыңды онот! Аллаһы Тәғәлә ебәргән сауапты дөрөҫ ҡуллан, телӘһә нимәгә әрәм итмә!

Шул ваҡыт көндөҙгө намаҙға саҡырыу ишетелә. Морат күп уйлап тормайынса, ихлас йылмайып, мәсет яғына юллана...

Морат Бөйгәмбәрҙән: "Ухуд тауындай алтыным булһа, уның миндә өс көндән дә артыҡ тороуын теләмәҫ инем", - тигән хәҙисен тәүҙән үк белһә икән дә бит...

әсәйем Уйылдан бабайҙы саҡырып килтерер булдылар.

Бер ваҡыт мин ныҡ итеп ауырып киттем. Әсәйем Уйылдан бабайҙы саҡырырға Рәйес ағайымды ебәрҙе. Бабай мине өшкөрөп тәрбиәләгәйне, икенсе көндө үк һауығып, мәктәпкә уҡырға киттем.

Бер йәшлек кенә һеңлебеҙ ҡаты ауырып китте. Мин күршеләргә уны йыуындырған тасты биреп торғанмын. Улар тасты мунсаға алып барғандар. Әсәйемә бәпәйҙең тасын күршеләргә биреп тороуым тураһында ла әйтмәгәнмен - һеңлебеҙ таң атыуға үлде. Бабайҙы саҡырып килтергәйнек:

- Ниңә баланың тасын кешеләргә бирҙегеҙ, балаға кешенең ауырыуы һуғылған бит, зыяннаш булған, - тине асыуланып.

Йәш баланы йыуындырған тасты сит кешегә бирергә ярамағанлығын белмәгәнмен шул...

### Байназар ауылы Шәмсениса Ишбулатова һөйләгәндәрҙән

Әллә нисә тапҡыр барҙым инде мин Уйылдан бабайға. 29 мартта бәпәйем тыуғайны. Шунан шәбәйә алмай ыҙаланым. Һыу ташҡын булһа ла, кәмәгә ултырып, Ямашҡа йөҙөп барҙыҡ. Уйылдан бабай өшкөрҙө, тәрбиәләне, бетеү яҙып бирҙе.

- Күкрәп ямғыр яуғанда, бағана башына һауыттар ултыртып, ямғыр һыуын йыйып ал, бетеүҙе шул һыуға һалып, сайып эс, - тине.

Уйылдан бабайға дауаланырға барған бөтә кеше лә шәбәйеп ҡайтып китер ине. Быуманан йә тамағына ашай алмай барған кешеләр ҙә арыуланып ҡайтыр ине. Тик изгелек кенә эшләп йөрөнө Уйылдан бабай. Кешеләр ауырымаһын, ғаиләләре менән тыныс, матур йәшәһендәр тип тырышты. Яҡшы кеше ине.

Зампред Ҡарағолов Мансур ағайҙың һөйләгәндәре лә иҫкә төштө әле. Ул ваҡытта колхоз ҙур ине. Мансур ағай ат менән Ямашҡа барған. Ул Уйылдан бабайҙың өйөнә килеп кергәндә ул тас менән һыу алып сығып барған була. "Ошо микән ни быларҙың данлыҡлы муллалары",- тип эстән генә уйлап ҡуя. Киске ашты ашағандан һуң йоҡларға йыйыналар. Уйылдан бабай:

- Атыңды анауында тыша, - тип, Мансур ағайға урын күрһәтә.

Ағай иртәнсәк тороп, аты янына барһа, ни күрһен: аттың аяҡтары кирегә әйләнгән. Ҡото осҡан Мансур ағай муллаға килеп:

- Ағай, аттың аяҡтары әллә ни эшләгән, - тигән.

- Ярар, атыңды барып алып бында килтер, - тигән мулла бабай.

Мансур ағай атын алырға барһа, атҡа бер ни ҙә булмаған, үлән ашап йөрөй икән.

### Тимер ауылынан Зөһрә Солтанова һөйләгәндәрҙән

80-се йылдар тирәһендә Ленинградтан, һөйләшмәгән ҡыҙын алып, бер ҡатын Уйылдан мулланы эҙләп килгән. Нисә көн булғандарҙыр Ямашта, уныһын иҫләмәйем. Ҡатын ҡайтырға йыйына башлағас, Уйылдан мулла: "Юлда бала һөйләшеп китер, мәрйә халҡы сабырһыҙ була торған, сарбайлап илап, баланың ҡотон осороп ҡуйма", - тигән. Ысынлап та, Ғәлиәкбәр менән Берлек араһында ат менән китеп барғанда ҡыҙ бала: "Мама, я есть хочу", - ти. Әсә кеше шатлыҡтан әкрен генә илап ебәргән. Ҡайтҡас та Уйылдан муллаға 500 һум аҡса ебәргән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғүмере буйына төбәгебеҙ халҡының тән һәм йән сәләмәтлеге һағында тороусы изгелексән табип-мулла, тылсым эйәһе, әүлиә Уйылдан бабайыбыҙ хаҡында иҫтәлектәр "Башҡортостан - әүлиәләр иле" тигән китапта урын алырға тейеш, тип иҫәпләйем. Урал батырҙың тыуған төйәге Бөрйән - үҙе әүлиәләр иле. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, данлыҡлы, көслө дин әһелдәребеҙҙең күбеһе репрессия ҡорбандары булған. Алдыбыҙҙа уларҙың исемдәрен халҡыбыҙға кире ҡайтарыу бурысы тора. Ҙур шәхестәр нисәмә йылға бер генә тыуа бит. Ил көҙгөһө булған шәхестәрен ҡәҙерләп, изге эштәрен онотмай, йәш быуынға аманат итеп тапшырып барған халыҡ үлемһеҙ, мәңге йәшәр, башҡа ҡәүемдәр араһында хөрмәтлеләрҙән булыр, ти.**

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**
**(Аҙағы. Башы 30-31-се һандарҙа).**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# БАЙЛЫҠТАРЫҢДАН...

## кәфенең генә үҙең менән китә

**Ҡөрьәндең өстән бер өлөшөн тәшкил иткән ҡисса тип аталған хәл-ваҡиғалар һүрәтләнгән текстар аша Ислам дине асылына тиҙерәк төшөнөргә мөмкин, тип раҫлай дин әһелдәре. Мәҫәлән, Фирғәүен һәм Хаман менән бер рәттә тороусы иҫ киткес бай, тәкәббер хаким Ҡарун тураһында ике сүрәлә әйтелә: "Шулай уҡ Ҡарун, Фирғәүен һәм Хаманды үлемгә дусар иттек. Улар алдына Муса яҡты билдәләр менән килде, әммә улар ғорурлыҡтарын еңә алманылар, беҙҙең ерҙә бирелгән язаға дусар ителделәр" ("Әл-Анкабут" сүрәһе 29/39).**

Кем ул Ҡарун? Уның менән булған хәлдәр "Әл-Кассас" сүрәһендә тасуирлана. Өгөт-нәсихәттәргә ҡолаҡ һалмаған һауалы бай була ул. Иҫәпһеҙ-хисапһыҙ хазинаһы һаҡланған бүлмә асҡыстарын уның артынан әллә нисә ялсыһы күтәреп йөрөй. Туғандарының рөхсәт ителгән сиктәрҙән уҙмауын һорап: "Аллаһы Тәғәлә бүләктәре ярҙамында алдағы тормошоңда торасаҡ урыныңды ҡайғырт. Аллаһы Тәғәлә һиңә яҡшылыҡ күрһәткәнен иҫеңдән сығарма һәм тәҡдиреңә кәмһенеп ҡарама, ер йөҙөндә янъял ҡуптарма, сөнки Хоҙай тәртип боҙоусыларҙы яратмай",- тип ялбарыуҙарына ("Әл-Кассас" сүрәһе, 28/77) ҡаршы тәкәббер хаким былай тип яуап бирер булған: "Барлыҡ был мөлкәтте мин үҙ белемем ярҙамында тупланым".

Артабан уның менән нимә булыуы түбәндәге аяттарҙа тасуирлана: "Ҡарун халҡы алдына зиннәтле кейемдәрҙә, күркәм ҡиәфәттә килеп баҫты. Был донъя рәхәтлектәрен татып белергә теләүселәр: "Ҡарунға бирелгән нәмәләр беҙгә лә эләкһә ине! Ысынлап та бөйөк тәҡдирле ул!"- тине. Белемгә эйә булыусылар иһә: "Хәсрәт! Аллаһы Тәғәлә ышанған һәм хаҡ эштәр башҡарыусыларҙы ғына бүләкләй. Был әжер тик сабырҙарға ғына тәтей", - тип әйтте. Шул саҡта беҙ ергә Ҡарун һәм уның йортон йоторға әмер бирҙек. Уның Хоҙайға ҡаршы сығып, ярҙам ҡулы һуҙырлыҡ дуҫтары булмай сыҡты, үҙе лә ҡотолоу юлдарын тапманы. Кисә генә Ҡарундың хәленә көнләшеүселәр: "Хәсрәт! Аллаһы Тәғәлә Үҙ ҡолдары араһынан кемгә теләй, шуға мул йә етерлек өлөш бирә. Әгәр ҙә Хоҙай беҙгә ҡарата мәрхәмәтле булмаһа, Уның ҡушыуы буйынса ер беҙҙе лә убыр ине. Хәсрәт! Хыянатсылар ысынлап та уңышҡа ирешмәй", - тип аңына килде" ("Әл-Касса" сүрәһе, 28/79-82).

Әммә халыҡҡа Ҡарундың тормош юлы хурлыҡ менән тамамланыуын күрһәтер алдынан Хоҙай уға ебәреләсәк яҙмыш тураһында иҫкәртеүҙәр яһай. Ҡарун Аллаһ биргән йомарт бүләктәрҙе мәңгелек донъяла сарыф итергә, шул уҡ ваҡытта кешелек ихтыяждарын да онотмай йәшәргә тейеш була. Хоҙай Ҡарунға матди байлыҡты мул бирә. Ҡарун тирә-яғындағы мохтаж кешеләргә ярҙам итеү, ерҙе һаҡлар урынға зинасылыҡ, аҙғынлыҡ, ҡыйралыш, мөлкәтен тәләфләүгә өҫтөнлөк бирә.

Донъя рәхәтлектәре күҙҙе томаландыра, әммә ул ваҡыт менән сикләнгән. Кеше бик ҡыҫҡа арауыҡта теге йәки был сәбәптәр арҡаһында байлығын юғалтырға, йә уны ҡалдырып, теге донъяға үтергә мөмкин. Әгәр ҙә кеше матди байлығын "мәңгелек банкы"на күсермәй икән, тимәк, ул Әхирәттә ярлы булып ҡаласаҡ. Нәҡ ошо хаҡта Ҡарун иҫкәртелә лә инде: "Был донъяла биреләсәк өлөшөңә лә иғтибар бүл". Сүрәлә кеше матди байлыҡ туплау тураһында ла хәстәрлек күрергә, шул уҡ ваҡытта рухиәт хаҡында ла онотмаҫҡа тейеш булыуы айырып әйтелә.

Сүрәләр аша Аллаһы Тәғәлә ер йөҙөндәге рәхәтлектәрҙең тик ваҡытлыса булыуын төрлө социаль ҡатламдарҙа тороусы кешеләрҙең иҫенә төшөрөп мөрәжәғәт итә. Ул: "Йыйығыҙ", - ти һәм: "... Иң яҡшы кәрәк-яраҡ - ул диндарлыҡ, Алла рәхимһеҙлегенән ҡурҡыу" ("Әл-Баҡара" сүрәһе, 2/197) - тип иҫкәртә. Шулай уҡ Хоҙай: "Беҙ һеҙҙе яланғаслыҡтан ҡотолдорор һәм үҙегеҙҙе матурлау өсөн кейем ебәрҙек, - ти.- Әммә диндар булыу - иң яҡшы кейем", - тип өҫтәй ул ("Әл-А'раф" сүрәһе, 7/26). Кеше яңылышыуын танып, яҙылғандарҙы үтәһә, ике донъяла ла ҙур уңыш ҡаҙаныр.

Мәғәнәһенә төшөнгән осраҡта, донъялағы бөтә байлыҡтарҙан кеше тик кәфенде генә үҙе менән алып китә ала. Үлем алдында бөтәһе лә бер тигеҙ: тәмле ашап затлы һарайҙарҙа ғүмер итеүсе лә, Аллаһы Тәғәләгә һыйынып, биргәненә рәхмәтле булып йәшәүсе лә. Ҡөрьән хаҡ юлға өндәп, мосолмандарға былай тип мөрәжәғәт итә: "... Ҡөрьәндә күрһәтелгәндәрҙән башҡара алған ғәмәлдәрҙе үтәгеҙ, намаҙ уҡығыҙ, зәкәт таратығыҙ. Изге эштәрҙән нимә генә атҡарһағыҙ ҙа һеҙ уны Аллаһы Тәғәләлә табырһығыҙ, Ул һеҙҙе барыһы өсөн дә яҡшылыҡ менән бүләкләйәсәк. Хоҙайҙан кисереүен һорағыҙ, сөнки Аллаһы Тәғәлә Мәрхәмәтле һәм Ярлыҡаусы" ("Әл-Муззаммиль" сүрәһе, 73/20).

**ҒОСМАН хәҙрәт.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

### Проблемаларығыҙҙы проблема итеп ҡалдырмағыҙ

*Лидерҙың абруйын уның хәл иткән проблемаларына ҡарап баһаларға мөмкин. Лидер һәр саҡ үҙенә тап килгән проблема эҙләй.*
*Джон Максвелл.*

Йоғонтоло лидерҙар һәр саҡырыуға ҡаршы бара. Тап ошо сифат еңеүселәрҙе илаҡтарҙан айырып тора ла инде. Лидер ниндәй генә өлкәлә эшләмәһен, уға һәр саҡ проблемалар менән күҙгә-күҙ осрашырға тура киләсәк. Улар өс сәбәп буйынса ҡотолғоһоҙ. Беренсенән, беҙ даими рәүештә ҡатмарлашып һәм үҙгәреп торған донъяла йәшәйбеҙ. Икенсенән, төрлө кешеләр менән аралашабыҙ. Өсөнсөнән, осраған хәл-тороштоң барыһы менән дә идара итә алмайбыҙ. Проблемаларҙы яҡшы хәл итә алыу һәләтенә эйә лидерҙар түбәндәге биш сифатҡа эйә:

**Улар проблемаларҙы алдан күрә.** Проблемаларҙан ҡасып булмағас, яҡшы лидерҙар уларҙы көтә һәм алдан күрә. Юлды шыма һәм тура тип иҫәпләгән һәр кем даими рәүештә күңелһеҙлеккә осраясаҡ. Был осраҡта Африка буйлап йөрөгән миссионер Дэвид Ливингстондың яуабы бик урынлы. Миссионерлыҡ ойошмаһы етәксеһе, уға ярҙамсылар ебәрергә теләп, хат яҙа: "Һеҙ булған ергә барып етерлек яҡшы юл барлығын беләһегеҙме? Әгәр белһәгеҙ, беҙ һеҙгә ярҙамға башҡаларҙы ебәрер инек". Ливингстон хатҡа былай тип яуап бирә: "Әгәр һеҙҙең кешеләрегеҙ бында яҡшы юл барлығын белеп кенә килерлек булһалар, улар миңә кәрәкмәй. Миңә бер ниндәй юл булмағанда ла килергә риза булған кешеләр кәрәк". Әгәр һеҙ ыңғай көйләнештә булып та, ниндәйҙер кире нәмә осрауын иҫәптә тотаһығыҙ икән, юлығыҙҙа осраған барлыҡ проблемаларҙы ла хәл итергә һәр саҡ әҙер буласаҡһығыҙ.

**Лидерҙар дөрөҫлөктө нисек бар, шулай ҡабул итә.** Кешеләр проблемаларға төрлөсә ҡарай: уларҙы ҡабул итеүҙән баш тарта; ҡабул итә һәм артабан ошо хәл-торошҡа яраҡлаша; ҡабул итә һәм хәл-торошто яҡшыға үҙгәртергә тырыша. Лидерҙар бары тик өсөнсө ысулды ғына һайлай.

Бер генә лидер ҙа бер үк ваҡытта башын ҡомға тығып һәм үҙенең артынан килеүселәрҙе ажғыр һыу аша алып сыға алмай. Йоғонтоло лидерҙар һәр саҡ килеп тыуған проблемаларҙы батырҙарса ҡаршы ала.

**Улар тулы картинаны күрә.** Лидерҙар һәр саҡ күҙ алдында тулы картинаны күрергә тейеш. Улар үҙҙәренә хис-тойғоға бирелергә рөхсәт итмәй. Шулай уҡ улар деталдәрҙә һәм ваҡ-төйәктә соҡсоноп, күҙ уңынан ысынлап та мөһим нәмәләрҙе ысҡындырырға тейеш түгел. Әҙәбиәтсе Альфред Арманд Монтапер былай тип яҙған: "Күпселек алдында ҡаршылыҡ күрә; бик аҙҙар ғына маҡсат күрә; тарих һуңғыларҙың уңышын ғына теркәй, ә тәүгеләр онотолоуға дусар була".

**Улар эҙмә-эҙлекле.** Ричард Слома түбәндәге кәңәште бирә: "Бер ваҡытта ла шунда уҡ тотош проблеманы хәл итергә тырышмағыҙ - уларҙы бер рәткә теҙеп, бер-бер артлы хәл итегеҙ". Күңелһеҙлектәр менән проблемаларҙың ҙурлығын күреп, башта баштан-аяҡ күмелеү тойғоһо кисереп, һуңынан уларҙың барыһын да бер юлы хәл итергә тырышып ҡаңғырған лидерҙар күберәк уңышһыҙлыҡҡа осрай. Әгәр алдығыҙҙа күп проблема тора икән, уларҙың әле хәл иткәненең осона сыҡҡанығыҙға инанғас ҡына икенсеһенә тотоноғоҙ.

**Джон МАКСВЕЛЛ.**



## 11 АВГУСТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.05 "Добрый день".
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Ясмин". Мелодраматический сериал (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Личная жизнь следователя Савельева". Детективный сериал. 17-я и 18-я серии (16+).
23.30 "Викинги". Исторический сериал (18+).
01.20, 03.05 "Добро пожаловать в Муспорт". Мелодрама (16+).
03.00 Новости.
03.25 "В наше время" (12+).
04.20 "Контрольная закупка".

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Порт-Артур. Мы вернулись". Фильм 1-й (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Девчата" (16+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.45 "Вести-Башкортостан".
18.05 "Вести. Дежурная часть".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Королева бандитов". Сериал. Часть 1-я (12+).
00.40 "Аллергия. Реквием по жизни?" Док. фильм (12+).
01.55 "Двенадцать стульев". 1-я серия. Комедийный сериал.
03.20 "Порт-Артур. Мы вернулись" (12+).
04.15 "Комната смеха".

## "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Замандаштар". Венера Ишмөхәмәтова (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Поэзия". Шиғырҙар (6+)
11.35 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.35 "Кәмит". Юмор (6+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина". "Оҙон көй" (6+)
15.00 "Башҡортостандың ете мөғжизәһе". "Башҡорт кейеҙе" (6+)
